*Лариса Абдуллина*

# Балҡантау рухы



6+

«Полиграфкнига» Зак. 6—55. 1986 г. Тир. 5 млн.



*Һәр яҙыусының да бала сағы була...*

*Беҙ бәләкәй саҡта китап уҡырға ярата торғайныҡ. Мин әкиәттәргә, мажаралы хикәйәләргә, фантастик яҙмаларға айырыуса өҫтөнлөк бирҙем. Шуға күрә бөгөнгө заман уҡыусыларына — һеҙгә, ҡәҙерле дуҫтарым, ошо китап аша өндәшеп ҡарағым килде. Минең улдарым да — һеҙҙең тиҫтерҙәрегеҙ. Балҡантау рухы беҙҙе таныштырып ҡына ҡалмаһын, дуҫлаштырһын да! Мин быға бик ныҡ өмөт итәм!*

*Һеҙҙең Лариса апайығыҙ*

84(2Рос=Баш)-44
А 13 -4Б

*Лариса Абдуллина*

# Балҡантау рухы



**Мажаралы фантастик повесть**

66243- 49903 4/10 22
МУНИЦИПАЛЬНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ КУЛЬТУРЫ "ЦЕНТРАЛИЗОВАННАЯ БИБЛИОТЕЧНАЯ СИСТЕМА" КУМЕРТАУ РБ

КИТАП
Өфө • 2015

УДК 821.512.141-31
ББК 84 (2 Рос=Баш)-4
А12

Рәссамы *Хаят Йәрмөхәмәтова*

Яҡташтарыма ижади ҡанаттар,
милләттәштәремә бөркөтлө ғүмер,
уңышлы юлдар,
Балҡантау рухын тойоп үҫкән
балалар теләйем! Лариса
10.04.2016.

**Абдуллина, Л. Х.**
А12 Балҡантау рухы : мажаралы фантастик повесть / Лариса Абдуллина. — Өфө : Китап, 2015. — 92 бит.

ISBN 978-5-295-06298-8

Шәйехзада Бабич исемендәге Дәүләт республика йәштәр премияһы лауреаты, танылған шағирә Лариса Абдуллина йәш үҫмерҙәр өсөн ижад ителгән мажаралы фантастик повесын уҡыусылар хөкөмөнә тәҡдим итә.

УДК 821.512.141-31
ББК 84 (2 Рос=Баш)-4

ТП—147/15

ISBN 978-5-295-06298-8

© Абдуллина Л. Х., 2015
© Йәрмөхәмәтова Х. Р., һүрәттәр, 2015
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2015



## Мәктәптә ниңә ялҡытҡыс?

*Һөйөклө улдарыма бағышлайым*

Геометрия уҡытыусыһы тамам теңкәһенә тейҙе Салауаттың. Ошо теоремаларҙы иҫбатламаҫ өсөн, ул әллә ниҙәр эшләргә әҙер. Әсәһе лә бит әле уҡытыусы һүҙен һөйләгән була, имеш, малайҙар математиканы яҡшы белергә тейеш. Шул Рәмил Маратовичтың дәрестәренә инеү — үҙе бер яза кеүек Салауатҡа. Бөгөн нисек тә түҙеп сығыр ҙа, иртәгә барыбер инмәйәсәк геометрияһына уның. Эйе, инмәйәсәк! Әсәһе командировканан бер көнгә һуңлап ҡайтам тине бит, тимәк, ҡустыһын ала ла, Дәүләкән районында йәшәгән өләсәһенә шыласаҡ!

— Өләсәй, сәләм! Һин өйҙәме? Әсәйем ҡайтҡансы, беҙ һиндә булып торорбоҙ, йәме. Өсәүләп киләбеҙ! Эйе, Айбулат туғаным һәм дуҫым Хансура. — Салауат оҙон-оҙаҡ һөйләп тормайынса, телефонын һалып та ҡуйҙы. Хәҙер өләсәһе лә теләһә нәмә һораша башлар, тиҙерәк ҡайтып,

уның ҡоймаҡтары менән сәй эсергә кәрәк! Өләсәй янында рәхәт шул: ул әрләмәй, төрлө тәмлекәстәр менән һыйлай.

Гөлнур әбей ейәненең шылтыратыуынан бер ни тиклем баҙап ҡалды. «Командировканан һуңлап ҡайта тиме, ә нишләп бында килергә булдылар икән? Йә, ярай, бигерәк һәйбәт, һағынып та киткәйнем үҙҙәрен. Иртәгә шәмбе көн дәрестәре бар-барлығын... Әллә уҡымайҙар микән?» Өфөнөң үҙәгендә урынлашҡан башҡорт гимназияһынан ейәндәрен барып алғаны ла бар әбейҙең, шуға күрә ҡайҙа, нисек уҡығандарын яҡшы белә. Ҡыҙы ла шылтыратып әйтмәне бит әле, исмаһам, балалар ҡайтыр тип, ҡуй инде. Кейәүе Чечняға ебәрелгәндән алып, Гөлгөнәһе ал-ял белмәй эшләй, ваҡыты ла булмағандыр инде хәбәрләшергә. «Нишләп ултырам әле, теләһә ни уйланып, улдарым ҡайтыуына берәй ризыҡ әҙерләйем», — тип әбей алъяпҡысына үрелде.

* * *

Үҙәк баҙар эргәһенән автобустар Дәүләкәнгә сәғәт һайын китеп тора. Шуға ла малайҙарға туҡталышта оҙаҡ торорға тура килмәне. Бына ошо ҡустыһы Айбулат ҡына теләһә ниндәй һорауҙар биреп аптырата.

— Салауат ағай, ә иртәгә дәрескә бармайбыҙмы ни?

— Бармайбыҙ шул! Сөнки беҙ иртәгә был ваҡытта Гөлнур өләсәйебеҙҙә сәй эсеп ултырған булабыҙ, — тип яуапланы ағай кеше.

— Ә ниңә әсәйем унда ҡайтырға ҡушты? Ул бит йәкшәмбе Өфөгә килеп төшә, ә уңарса Хансураларға барып торорбоҙ?.. — Айбулат өҙмәне лә ҡуйманы.

— Беләһеңме нимә, мыжыҡ, бар үҙең уның әсәһе янына, тороп ҡал, ә беҙ Хансура менән ауылға ҡайтып киттек! Шулай бит, дуҫым? — тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе Салауат.



— Эйе, — тигән булды Хансура. Ул был бер туғандарҙың үҙ-ара ыҙғышыуына өйрәнеп тә бөткән, хатта барыбер Салауат үҙенекен итәсәген, ә ҡустыһы ағаһы менән килешәсәген белә.

— Иртәгә шундай ҡыҙыҡ дәрестәр керә! Тарихты аҙна буйына көткәйнем. Мин Интернеттан шундай мәғлүмәттәр таптым, Радик Наилевич аптырап китер ине, их... — Айбулат әллә ҡалырғамы икән тип, әле автобусҡа, әле туҡтаған трамвайға ҡарап торҙо.

— Эйе, һин тапҡан мәғлүмәтте Радик Наилевич бөтөнләй ишеткәне лә юҡ! Бына беләһеңме, ул Интернеттың ни икәнен дә белмәй һәм һинең әйткәндәреңде иҫе китеп тыңлап торор инде! Аптыратаһың һин мине, белем эйәһе! Әллә бөтөнләй иҫәрләнә башланыңмы?! Йә, ярай, ҡайтмаһаң, ҡал, әйҙә, һине көтөп торғансы, бөтә автобустар китеп бөтә хәҙер! — Салауаттың ҡустыһына бик ныҡ итеп йәне көйҙө. Артына аҫҡан сумкаһынан тотоп, бер аҙ елтерәтеп тә алды.

— Һин шул үҙеңдең Зөлфиәңде күрергә ҡайтаһың инде. Каникул ваҡытында уға сәскә бүләк иткәнеңде күрмәне тиһеңме әллә? — Айбулат артыҡ ысҡындырғанын аңлап ҡалды, тик һуң ине инде.

Салауат ҡустыһына киҙәнергә итте лә:

— Юғал бынан! — тип ҡысҡырып ебәрҙе.

— Йә, ярай, ағай, улайһа, мин әсәйҙе бында көтәм. Телефон бар бит, бәйләнештә булырбыҙ! — Айбулат автобус тәҙрәһенән ҡарап торған кешеләр алдында бер аҙ уңайһыҙланып та китте, ахырыһы — һаубуллашып, килгән трамвайға өлгөрәйем тип, юл аша йүгерҙе.

Салауат аптырап ҡалды. Ҡара һин уны! Берәй нәмә булһа, шул ҡара сәсле муйыл күҙле Зөлфиәне хәтерләтеп, төрттөрөп ала. Юҡ, ул туғанын алып ҡайтырға тейеш.

Етмәһә, иртәгә ҡустыһы мәктәптә булып, ул бармаһа, нимә тип яуап бирер? Аҙаҡ, әйҙә аҡланып тор класс етәксеһе алдында, бигерәк тә анау алгебра белгесе теңкәһенә тейер. Юҡ, Айбулатһыҙ ҡайтырға ярамай!

— Айбулат! Айбулат! Туҡта әле!!!

Юлдың теге яғына сығып еткән ҡустыһы, ағаһының тауышын ишетеп, боролоп ҡараны. Салауат уны ҡул болғап саҡыра ине. «Тағы нимә булды? Ҡайтмайым тигәс, барыбер ҡайтмайым бит инде!» Айбулат бер нәмәгә лә ҡарамай, ҡарарын үҙгәртмәҫкә булды, әммә ағаһы саҡырғас, кире яндарына бармайынса булдыра алмай. Малайҙар уңға-һулға машиналар елдергән киң юлдың уртаһында осрашты.

— Айбулат, мин һиңә әйтергә онотҡанмын. Иҫләйһеңме Балҡантауҙағы мәмерйәне? Ҡарт өләсәйебеҙ һөйләгәйне уны. Беҙ Хансура менән шунда инәсәкбеҙ. Әйҙә, бергә ҡайтайыҡ! — Салауат ағаһынан былдай һүҙ ишетермен тип һис тә уйламаған малай аптырап ҡалды.

— Мәмерйәгә?! Ә һеҙ унда нисек инәһегеҙ? Уның бит керә торған урынын үлән ҡаплаған, тиҙәр?! — тине ул күҙҙәре осҡонланып китеп. Ҡустыһын ылыҡтырыр өсөн әле генә сәбәп эҙләп тапҡан Салауат аптырап ҡалманы:

— Һуң һин үҙең бит уҙған аҙнала ғына «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосының бер вариантын уҡығанда, өс таш ҡалҡып торған ергә барып, серле һүҙҙәр әйткәндә, мәмерйә асылып киткән, тинең. Шулай булғас, табырбыҙ тип уйлайым, — тине Салауат башына килгән мәғлүмәткә ҡыуанып.

— Эйе, унда шулай тип яҙылғайны. Мин Радик Наилевичҡа ла тап ошо эпос хаҡында яңы мәғлүмәт тапҡайным бит! — Айбулат аптырап ҡалды...





— Бына шуларҙы файҙаланыр ваҡыт етте, туғанҡайым, шулай булғас, йыйын, әйҙә сәфәргә!

Айбулаттың йөҙөнә ғәйепле төҫ инде.

— Ағай, һин мине ғәфү ит инде, бөгөн мәктәпкә ноутбукты алып килгәйнем... Унда шундай ҡыҙыҡлы боронғо ҡаласыҡты таптым, шул хаҡта класташтарыма күрһәтергә теләгәйнем...

— Ә бына быныһы өсөн, аҡыллы баш, әсәй алдында яуап тотасаҡһың, белдеңме? Әле ноутбук ҡайҙа? — Салауат ярһып китте. Айбулат сумкаһын асып, ағаһының ҡулына ылыҡтырғыс «ҡара китап»ты тотторҙо.

— Йә, ярай, алыуың, бәлки, һәйбәт тә булғандыр. Кем белә, мәмерйә эсендә видео, фото төшөрөргә тура килер?.. Тик йөгөңдө үҙең күтәрәһең! Шунан, юлға сыҡтыҡмы?

— Әйҙә, ағай! — Малайҙар бер-береһенә ҡарап йылмайышты.

Йөгөңдө үҙең күтәрерһең тиһә лә, Салауат ноутбукты ҡустыһынан алып, юл буйына төрлө уйындар уйнап, социаль селтәрҙәрҙә аралашып килде. Етенсе класс уҡыусыһына бары шул ғына аңлашылмай ине: нимәгә кәрәк булды икән ул мәктәп тигәндәре? Бигерәк тә геометрия дәрестәре? Нимәлер дәлилләргә, дөрөҫләргә, аңлатырға? Беҙгә тиклем кемдер иҫбатлаған бит инде, аңлатҡан, уйлап тапҡан, ниңә уны яңынан ҡабатлайҙар икән, ә? Әсәһе үҙе уҡыған совет мәктәбен, дөйөм белем биреү нигеҙҙәрен маҡтаған була: улай бик һәйбәт булғас, ниңә Рәсәй компьютерҙар эшләү буйынса алда бармай? Ниңә әсәһе уларға ноутбукты кредитҡа алып бирә?

Мәктәпте ярата ул, яратмай түгел, унда уның класташтары, бик ҡыҙыҡлы күренгән биология, география дәрестәре бар. Физкультурала инде — Салауат һыуҙа йөҙгән балыҡ кеүек. Бына бер нисә йыл рәттән ул капитан булған футбол командаһы мәктәптә, районда ғына түгел, баш ҡалала беренсе урын яулай. Их, ниңә көн һайын бөтә дәрестәр урынына физкультура ғына инмәй икән?

## Балҡантау сере

Дәүләкән Өфөнән алыҫ түгел, шуға малайҙар район үҙәгенә килеп еткәнде һиҙмәй ҙә ҡалды. Ә бына Балҡантау аша ҡайтыр өсөн улар ауылға барған автобустан төшөп ҡалып, бер аҙ йәйәү атларға тейеш. Асыҡтырған да кеүек.

— Әйҙә, бөгөн ауылға ҡайтайыҡ! Иртәгә килербеҙ Балҡантауға! — тип әйтеп ҡараны Салауат ҡустыһын һынамаҡҡа. Әйе, Айбулат шулай эшләйек тиһә, автобустан төшөп ҡалмаҫҡа ул мең тапҡыр риза. Әммә ҡустыһының йөҙө шундуҡ боҙолдо:

— Һуң һин бит ҡайтышлай уҡ ҡарайбыҙ тинең. Иртәгә шәмбе тип йоҡлаясаҡбыҙ, шунан йәкшәмбе Өфөгә ҡайтырға кәрәк буласаҡ... Белдем инде мин һине: гелән шулай итәһең... — Айбулаттың ауыҙы тамам йәмшәйҙе.

— Йә, ярай, мыжыма, төшөрбөҙ, тигәс, төшөрбөҙ!.. Асыҡтырып киткәйне шул, — тигән булды Салауат.

— Ә минең ике ваҡ бәлешем бар, мәктәп буфетынан алғайным. Әйҙә, ашап алайыҡ, ағай! — Айбулат ағаһын ҡыуандыра алыуына шатланды. Салауат ике ваҡ бәлеште өсөһөнә тигеҙләп бүлде. Малайҙар ауылға йөрөүсе автобустан төшөп ҡалып, Балҡантауға табан атланы. Әлбиттә, үҫмерҙәргә был ризыҡ «сәп» итергә лә етмәне.

Балҡантауға яҡынлашҡан һайын уларҙы әллә нindәй серле тойғолар биләп алды. Әле генә шау-шыу килеп торған юл буйы тауыштары баҫылып, сихри урман тынлығы



сорнап алды. Әйтерһең, үҙенә төбәп килеүселәрҙең саф күңеле, изге ниәте, әскәрһеҙ ынтылышы тауҙы ғына түгел, бөтә тирә-йүнде һиҫкәндереп ебәрҙе. Яҡында ғына әллә нисәмә төр ҡоштар тауышы ишетелде, ҡайҙалыр аттар быштҡырған төҫлө булды, бүреләр олоуы ла ҡолаҡтарына салынғандай итте. Малайҙар хатта бер-береһенә ҡарарға баҙнат итмәй, тын да алырға ҡурҡҡандай, серле урындың арбағыс көсөнә буйһоноп, тау үренә атланы.

Ә бына риүәйәттәге өс ташлы мөғжизәле урын. Малайҙарҙың йөрәктәре дарҫ-дорҫ тибә башланы. Үҙ-ара тынлыҡты Салауат боҙҙо:

— Айбулат, ә һин ниндәй сихри һүҙ әйтергә кәрәклеген иҫләйһеңме һуң?

— Иҫләйем дә ул... Тик...

— Нимә тик? — Өндәшмәҫ Хансура телгә килде. — Мин ундай урындар тураһында ишеткәнем бар, доға уҡыһаң, хатта кешеләр күренмәй торғанға әйләнә. Тик ана шул теләһә ниндәй һүҙ түгел, тәғәйен доғаны белергә кәрәк!

— Эйе, нимә тик тип тораһың? Айбулат, әгәр иҫләйһең икән ул һүҙҙәрҙе, әйт! Ниңә ваҡыт һуҙырға? — Салауат ҡустыһына бойороҡ биргән кеүек өндәште.

— Ә таштар кҫмәһә, тау асылмаһа, һеҙ миңә асыуланмаҫһығыҙмы һуң?



— Асылмаһа асылмай инде, ҡайтып китербеҙ йырлай-йырлай өләсәй янына. — Салауат кире борола ла башланы. Шул саҡ үҫмерҙәрҙең баш осонан геүелдәгән тауыш сығарып, ғүмерҙә лә күргәндәре булмаған ҡош осоп үтте. Хансура ныҡ тертләне, Айбулат уға тотондо.

— Йә, әйҙә, әгәр дөрөҫ булмаһа, булмаҫ, әйт тә доғаңды! Бында ҡош-ҡорт йыйыла башланы түгелме? — Хансура ла талапсан өндәште.

*— Бисмиллаһир-рахманир-рахим*
*Йә ил Йә иймийах Йә Аллаһу*
*Йә Фәттәху Йә Фәттәху Йә Фәттәху*
*Йә Ябраилу Йә Ябраилу Йә Ябраилу,* —

тип Айбулат риүәйәттәге доғаны әйтеп тә бөтөрмәне, өс таш өс яҡҡа шылып — төньяҡҡа, көньяҡҡа, көнбайышҡа табан — көнсығышта малайҙар алдында тау ишеге асылып китте. Хансура баяғынан да нығыраҡ ҡалтыранды:

— Юҡ, мин бармайым һеҙҙең менән! Бындай урындарға теләһә нисек аяҡ баҫырға ярамай бит. Зәйнулла ишан тураһында Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте дәресендә һөйләмәнеләрме ни һеҙгә? Ул бит хикмәтле урындарҙың сихри көсө бар тигән...

— Хикмәтле? Ул бит насар тигәнде аңлатмай! Минең унда ингем килә ул! Бәлки, ер аҫты байлыҡтары барҙыр? Беҙ хазина тапһаҡ, әсәйебеҙгә ярҙам итә алыр инек, эйе бит, Айбулат? — Салауатҡа был мажара оҡшай башланы.

— Һөйләмә. Һөйләмә матди байлыҡ тураһында! Уй, Аллам, ниңә генә һеҙҙең менән барырға сыҡтым икән? Берәй бәләгә тарырбыҙ инде, моғайын. — Хансура илай башланы.

— Ағай, ҡарәле, унда нимә осоп килә ул?



Асылған тау ауыҙынан осоп килгән утлы шар кеүек нәмә тирә-яҡта дауыл сығарҙы. Малайҙар уны-быны уйлап та өлгөрмәне, ел уларҙы тау ҡуйынына алып инеп тә китте.

— Ой, нимә булды был?

— Ҡотҡарығыҙ, зинһар, ҡотҡарығыҙ!

— Ағай, тот мине, нығыраҡ тот!

— Был ниндәй дауыл?

— Беҙ ҡайҙа осабыҙ ул?

— Айбулат, туғаным, һин ҡайҙа?..

## Самабай тигән малай

Малайҙар уянып киткәндә, өсөһө өс яҡта, бер йәмле аҡланда яталар ине. Көслө ел-дауыл менән әллә ниндәй тау-урмандар, ҡаяларға бәрелә яҙып остолар, әммә бер ерҙәре лә һыҙырылмаған да хатта. Иң аҙаҡ Салауат уянды.

— Айбулат!!! — Ул ҡустыһының имен-аман булыуына ҡыуанып, йылмайып ебәрҙе. — Шунан, егеттәр, мажаралар башландымы? — тигән булды, әммә үҙенең һис кенә лә шаяртырға теләге лә, уйы ла юҡ ине. Бигерәк тә Хансураға ҡарағас, тамам көрһөнөп ҡуйҙы. Бына һиңә өләсәй ҡоймағы! Дуҫы башын күтәреп тә ҡараманы хатта. Күренеп тора, ул был сәфәргә сыҡҡанына үкенеп ултыра. «Хәҙер бошонһаң да, сәс йолҡоп илаһаң да, файҙа юҡ, хатта берәү ҙә ярҙамға килмәҫ! Иң мөһиме — мәмерйә эсендә мажараға тарымаҫҡа!» Салауат ошолар хаҡында уйланды.

— Салауат ағай, беләһеңме мин әле нимә хаҡында уйлайым? — тигән булды Айбулат.

— Нимә хаҡында? Өләсәйҙең ҡоймағы тураһында-лыр, — тип шаяртырға уйланы Салауат, әммә берәүҙең дә көлгөһө килмәне.



— Эйе, өләсәй хаҡында. Тик ҡоймағы тураһында түгел, ә уймағы хаҡында. Иҫләйһеңме ул нимә тигәйне, күршеләрҙең баҡсаһына төшкәс? — Салауат, хәтерләмәйем, тигәнде аңлатып, туғанына боролоп ҡараны.

— Инереңдән алда сығырыңды уйла, тигәйне бит ул, — тине Айбулат.

— Эйе, хәҙер иҫкә төштө. Әй һин, Хансура, ултырма бында балтаң һыуға төшкән һымаҡ. Әйтерһең, беҙҙең хәл яҡшыраҡ! Бөтәбеҙ ҙә бер үк мажараға тарыныҡ! Хансура, тим! Нишләп өндәшмәйһең? Әгәр артабан да шулай ултырһаң, туҡмалаһың, белдеңме! — Ебеп төшкән дуҫына йәне көйҙө Салауаттың.

— Шулай инде, хәҙер туҡмарға ла була, ҡасыр урын юҡ... Мин һиңә иптәш булып юлға сыҡтым, ә һин бында тик әрләп йөрөтәһең... Ит изгелек, көт яуызлыҡ! Дуҫ тигән була бит әле, етмәһә. Әгәр үҙеңдең футбол командаһына алам тимәһәң, бөтөнләй ҡайтмаҫ инем һинең менән. Мин ауылға йылына бер ҙә бармайым... — Хансураның кәйефе тамам төшкәйне.

— Нимә? Һин шул футбол өсөн генә минең менән юлға сығырға риза булдыңмы? Берәү, имеш, ҡала малайы... Күпме секция бар ҡалала, ә ниңә беҙҙән һәйбәтерәк уйнамайһың әле ул һин футболды, культурный паренёк? Ауылды яратмағас, улайһа, ниңә тәбиғәткә сығаһың, ә? Ике йөҙлө икәнеңде белһәм, эйәртеп тә йөрөмәҫ инем... — Салауат ҡыҙа башланы...

Шул ваҡыт ҡапыл үләндәр араһынан кемдер ҡарап торғанын һиҙеп ҡалды ул. Ҡарәле һин уны: бот буйлыҡ ҡына бер кеше уларҙың бәхәсен йылмайып күҙәтеп тораһы...

— Һин кем? — тине Салауат берсә ҡурҡыңҡырап, берсә ғәжәпләнеп.



66243 - 49903

г. Кумертау

— Мин — Самабай!!! Бәхәсегеҙ самаһын юғалтты бит, ә был изге тауҙа шаулашырға ярамай! Шуға һеҙҙе иҫкәртәйем тип килеп еттем... — Бәләкәс кешекәй малайҙарҙы телһеҙ ҡалдыра яҙҙы.

— Бәй, был нимә һуң ул? Беҙ ҡайҙа килеп эләктек? — Хансура үҙен ҡурҡыныс төш күреп, уянырға теләгәндәге кеүек, башын төрлө яҡҡа борғолай башланы.

— Әкиәт! Бына һиңә әкиәт! Класташтарға һөйләһәм, берәү ҙә ышанмаясаҡ! Әкиә-ә-әт... — Айбулат Самабайға ҡарап донъяһын онотто.

— Ә һин беҙҙе ни эшләтәһең инде хәҙер? — Бөтәһе өсөн дә Салауат һораны.

— Ни эшләтәһең? Бер ни ҙә эшләтмәйем. Әллә шундай яуызға оҡшағанмынмы?

— Юҡ та ул, тик әкиәттәрҙә яҡшы күренгәндәр ҙә яман була бит ҡай саҡ?

— Уныһы бит әкиәттә, ә һеҙ әле Балҡантауҙа!

— Ә ниңә: Балҡантауҙа әкиәт була алмаймы ни?

— Була-була, әгәр бик теләһәң. Һеҙ бында нисек килеп ингәнһегеҙҙер, белмәйем, сөнки тау инде бына нисәмә быуат берәүгә лә ишеген асмай, әммә сығыуы ла анһат булмаясаҡ! — Үлән буйлыҡ Самабай малайҙарҙың күҙҙәрен асып ебәрҙе.

— Сығыуы еңел булмаясаҡ? Быныһы көн кеүек асыҡ ине инде: мажараға тарырға теләмәгән кеше доға уҡып, тау эргәһендә торамы ни? Тимәк, беҙгә бынан сығыу өсөн дә доға белеү кәрәк? — Хансура йәнләнеп китте. Ул, әйтерһең, ҡулына артабанғы хәрәкәттәр планы картаһын тотҡан кеше һымаҡ: — Ә һин беҙгә юл күрһәт, Самабай! — тине.

— Юлды күрһәтә алмам шул, әммә мин, һеҙ теләйһегеҙме-юҡмы, әгәр саманан тыш яҡшылыҡ килһә лә, саманан тыш яманлыҡ килһә лә, һеҙҙең янда буласаҡмын. Әгәр инде үҙегеҙ саҡырып килтерергә теләһәгеҙ, ҡулығыҙға ҡылған алып, миңә өндәшегеҙ, шундуҡ табырмын һеҙҙе! — тине үлән буйлыҡ яңы таныштары.

— Ә ниңә һин саманан тыш яҡшы булһа ла киләһең? Ныҡ яҡшы булһа ярамаймы ни? — тип ҡыҙыҡһынды Айбулат.

— Донъяла бөтә нәмәнең дә самаһы булырға тейеш! Кешеләр ана шул алтын урталыҡты таба белһә генә бәхетле булыр! — тип аңлата башланы Самабай.

— Юҡ, бик оҡшап етмәнең әле ул һин миңә! Әгәр минең аҡсам күп була икән, уны тартып алырға киләһеңме? — тип һораны Салауат.

— Һеҙҙең аҡсағыҙ бармы ни?

— Булмаһа ни? Бәлки, беҙ бында байлыҡ табырбыҙ! — тине Салауат.

— Улайһа, уңыштар һеҙгә! Шулай ҙа онотмағыҙ: ярҙамым кәрәкһә, ҡулығыҙға ҡылған алығыҙ! — тине Самабай һәм юҡҡа сыҡты.



## Бәрәкәт иле

— Ағай, уның менән йәмһеҙ һөйләштең, беҙгә ярҙамға киләм тип тора, ә һин оҡшап етмәнең тиһең? — Айбулат ағаһының ҡылығын үҙһенмәне.

— Һин миңә өйрәтмә, йәме, бәләкәс! Беҙ барыбер үҙебеҙҙе, хатта шул иҫәптән әсәйебеҙҙе лә уйларға тейеш. Әгәр байлыҡ тапһаҡ, ҡалдырып китәйекме? Әллә уның менән бүлешәйекме? Бәлки, ул үҙе беҙҙе алдаштырып ҡилеп сыҡҡандыр бында? — Салауат та ҡыҙып китте.

— Ә мин улай тип уйламайым. Уның күҙҙәре матур, ҡарашы яҡты ине. Өләсәйем әйтә бит, кешенең күҙҙәрендә уның барлыҡ асылы яҙылған була, тип, — тине Айбулат.

— Ә миңә ул йәнһүрәт геройы һымаҡ булды. Анау хикмәтле нәмәләр генә килеп сыҡмаһын, ҡалғаны пүстәк ул! — тине Хансура.

— Ә нимә ул хикмәтле нәмәләр? Шуны һөйләйһең дә һөйләйһең, тик айышына төшөнә алмайым? — тип дуҫы яғына боролдо Салауат.

— Бына мин теләһә ниндәй халыҡтарҙың боронғо тарихы, туда-сюда, шундай нәмәләргә ышанмайым, атайым, тарихты һәр быуат үҙенсә үҙгәртеп яҙа, ти. Ә бына Зәйнулла Рәсүлев кеүек көслө рухиәт илселәренән ҡурҡам! Учалыла бер апай бар, ул кешеләрҙең уйын уҡый, дауалай, Зәйнулла ишан нәҫеленән икән, — Хансура тауышын кәметеп әйтте.

— Ә ниңә һин унан ҡурҡаһың?

— Әлләсе? Үҙең белмәгән, күҙеңә күренмәгән нәмәнән ҡурҡыта ла инде...

— Ағай, ҡарәле, анауында бер магазин кеүек нәмә күренә, ашап алырға берәй нәмә юҡмы икән? — Айбулат



әйткән яҡҡа боролоп ҡарап, малайҙар, ысынлап та, бер бәләкәй генә сауҙа үҙәген күреп ҡалды.

— Ә нишләп бая күренмәй ине һуң ул? — Салауат аптырауын йәшермәне.

Малайҙар шул яҡҡа табан йүгерҙе. Унда, ысынлап та, ризыҡтар һатыла икән, нимәләр генә юҡ! Тик уларҙың аҡсаһы самалы. Шул саҡ үҫмерҙәр Самабай хаҡында иҫкә төшөрҙө, әммә Салауат уны саҡырыуға ҡырҡа ҡаршы сыҡты.

— Ә нимә алабыҙ һуң? Бында бит икмәк тә бик ҡиммәт тора: берәүһе мең һум!

— Мең һум? Әйе шул...

Быңдай хәлде көтмәгән малайҙар нисек итеп икмәк һатып алыу тураһында хәстәрләй башланы.

— Бәлки, уларға берәй ярҙам кәрәктер? — тине Салауат.

Үҫмерҙәр йүгереп барып магазинда тауар ташыусы егеттән, эш булмаҫмы икән, тип һораны. Булыр тигәнде аңлатып, ул малайҙарҙы артынан саҡырҙы.

— Бына ошо йәшниктәрҙе анау келәткә ташып бөтһәгеҙ, һеҙгә ун һум түләнер! — тине ул.

— Ун һум??? Һин нимә, хыялыйландыңмы әллә? Беҙгә икмәклек тә тәтемәйәсәк бит! — Салауаттың ярһыуының сиге булманы.

— Улайһа, ярты икмәк тура килә! — тип йылмайҙы егет.

— Ярты икмәк? Былар беҙҙе тамам иҫәргә һанай ахырыһы... — Малайҙар аптырашып ҡалды.

— Аҡса — ул бит ҡеүәтле көс! Нишләп әле һеҙгә бында аҡса кәрәк булып китте? — Егет кеше оҙон-оҙаҡ аңлатып торманы, йөктәрен күтәрҙе лә сығыу яғына атланы.

Быныһы нимә булды инде, тигән кеүек, малайҙар бербереһенә ҡараштны.

— Улайһа, ярты икмәклек булһа ла ташып алайыҡ, ас йөрөп булмай бит инде! — Салауаттың тәкдиме булды был. Күмәкләшеп ташығас, йәшниктәр тиҙ арала урынына барып та ятты. Эштәре өсөн малайҙарға ярты икмәк килтереп тоттороҙолар.

— Был кемгә етә инде ул? Мин өйҙә бер үҙем бер икмәкте ашап бөтөрәм, — тине Хансура. Һүҙ көрәштереп торорға берәүҙең дә теләге булманы, улар яҡында ғына аҡҡан шишмә янына килеп, икмәкте бүлешеп ашарға тотондо. Тик ни хикмәт: бер ҡабым ғына ҡаптылар, әммә туйғандай булдылар. Үҙенең ғәжәпләнеүен белдермәҫкә тырышҡан Салауат икмәкте тағы ла ҡабам тип ынтылғайны, юҡ, ул үҙенә хәл кереүен, бөтөнләй ас түгеллеген аңланы.

— Малайҙар, һеҙ ҙә туйҙығыҙмы ул? — тип һораны Салауат.

— Эйе!

— Эйе шул!!!

Улар был хәлде нисек аңлатырға ла белмәне...

— Их, ошо мәлдә теге Самабай килеп сыҡһа, беҙ, моғайын, серҙе сисер инек! — тип әйтеп тә өлгөрмәне Айбулат, бәләкәй буйлы малай пәйҙә булды.

— Был нимә ул, Самабай? Беҙҙе алдаштыралармы әллә? — Хансура уға икмәген һондо.

Самабай башта рәхәтләнеп көлдө:

— Их һеҙ, минең ерҙәш дуҫтарым! Бөтөнләй тыңламайһығыҙ икән: әйттем бит, ерҙә һәр нәмәнең үҙ самаһы бар, тип. Бөтә нәмә лә һеҙ баһалағанса баһаланмауы ихтимал. Был икмәк ҡояш нурҙары төшкән, иң саф шишмәләр



һуғарған баҫыуҙа үҫә, уны яҡты күңелле кешеләр үҫтерә, иң изге күңелле кешеләр бешерә! Һеҙ Бәрәкәт илендә йөрөйһөгөҙ! Бында һәр нәмә бәрәкәтле, ҡотло!

— Ә беҙҙең Башҡортостанды ла бәрәкәтле ил, тиҙәр ул! — тип ҡаршы төштө Айбулат.

— Уныһы шулайҙыр, әйтә алмайым, — тине Самабай, үҙе серле генә йылмайып ҡуйҙы. — Әммә ер кешеләре тәбиғәттән ситләшкән һайын, уларҙан бәрәкәт ҡаса.

Хансура уны бүлдерҙе:

— Ә мин, башҡорттар тәбиғәткә бик яҡын халыҡ, тип ишеткәнем бар!

— Шулай-шулай! Тик бөтә Ер шары техноген үҫеш юлын һайлағанда, башҡаларҙан айырылып тәбиғи шарттарҙа йәшәүе ауыр. Әммә, мөмкин! Уның өсөн тамырҙарыңды белеү мөһим. Балҡантау һеҙгә үҙ һорауҙарын бирмәнеме әле? Юҡ, икән, көтөгөҙ! — тине Самабай һәм малайҙарға аҡса күрһәтте. — Бына был аҡсаға тотош ошо магазинды ла, ошо ерҙәрҙе лә һатып алып була!

— Булмаҫ! Был бит һуҡыр өс тин! — тине Хансура. — Ундай аҡсалар хәҙер юҡ та?

— Бына, күрәһегеҙме, һеҙ аҡсаны нисек баһалайһығыҙ? Ә тәңкәләрҙең үҙ баһаһы бар. Борон хатта кешеләр, аҡса урынына берәй эш башҡарһам буламы, тип һорағандар, сөнки аҡсалар ошо ерҙең алтынынан, көмөшөнән эшләнгән булған. Аҡса менән бергә ҡот, бәрәкәт китеү ихтималлығы көслө. Шуға ҡулығыҙға килеп кергән аҡсаны һаҡлай ҙа белергә кәрәк.

— Тимәк, әгәр бая беҙҙең хеҙмәтебеҙгә ун һум түләнгән булһа, ул ҙур аҡса иҫәпләнә? — тип һораны Айбулат.

— Эйе, ул ҙур аҡса. Ерҙәге кешеләрҙең матди байлығының үҙкимммәте юғалған, шуға ла улар аҡсалары ҡасан

килеп кергәнен, нисек сығып киткәнен белмәй, — тип аңлатты Самабай.

— Ҡыҙыҡ! Минең бындағы тормошто тағы ла нығыраҡ өйрәнгем килеп китте ул! — Салауаттың күҙҙәрендә осҡон ҡабынғандай итте.

— Минең тиҙерәк ҡайтҡым килә! — Хансураға бындай уңайһыҙлыҡтар оҡшамай ине.

## «Башҡорт хәрефтәре баҡсаһы»

Мәмерйә эсендә тегеләй-былай йөрөп бер ни тиклем ялҡып киткән малайҙар алыҫта ниндәйҙер асыҡлыҡ барлығын күреп ҡалды. Улар унда атлап түгел, осоп тигәндәй барҙы. Ни генә тимә, бәлки, бынан сығыу урыны ошолор, тип өмөт иткәйне улар. Әммә серле аҡлан сағыу балҡыш менән уларҙы сихырлағандай итте. Салауат менән Айбулат унда ағып тигәндәй барып инде, әммә Хансураны нишләптер нимәләр туҡтатып тик тора. Күҙгә күренмәгән бер диуар хасил булған кеүек, малай тегеләй барһа ла, нимәгәләр бәрелә, былай атлаһа ла, туҡтап ҡала. Аптырағас, Салауат менән Айбулат уны ике яҡтан етәкләп алға ынтылды. Ниндәйҙер бер сихри көстө еңгән кеүек, малайҙар ҡыуанышып, яланға тәгәрәп китте.

Ә аҡландың уртаһында нурланып торған һәйкәлдәр балҡый. Салауат оҙаҡ уйлап торманы, шундуҡ береһенең башына менеп тә китте. Был ни ғәжәп?! Һәйкәл үҙе лә ниндәйҙер йылылыҡ бөркә!

Айбулат менән Хансура ла һәйкәлдәр тирәләй йүгерешә башланы. Балалыҡ үҙенекен итә. Әле генә бәхәсләшеп килгәндәрен онотоп, малайҙар сағыу аҡланды айҡай-байҡай сабыша башланы. Һәйкәлдәргә үрмәләне.

Шул саҡ ҡапыл Айбулат ҡысҡырып ебәрҙе:



— Ағай, һуң былар бит хәрефтәр!

— Хәрефтәр?

— Эйе! Ана ҡара һин ултырғаны ул «Һ» хәрефе бит!

Салауат шунда ғына абайлап ҡалды. Ысынлап та, һәр һәйкәл хәреф һынында эшләнгән дә инде! Малайҙар ни эшләргә белмәй торғанда, Хансура телгә килде:

— Самабайҙы саҡырыр кәрәк! Ул бит, әгәр берәй йомошоғоҙ булһа, сал ҡылғанды усығыҙға алығыҙ, һәм мин килеп етермен, тине.

— Эйе шул! — Салауат хәреф өҫтөнән төшә һалып, аҡланда ҡылған эҙләй башланы. Уға алыҫ китергә тура килмәне, малай шундуҡ ҡылғанды ҡулына алды һәм Самабайҙы саҡырҙы. Ә ул, әйтерһең, шуны ғына көтөп торған, йылмая-көлә хәрефтәр араһынан килеп тә сыҡты:




Һ
Ү
Ә
Ҙ
Ң
Ҡ
Ө
Ҫ

— Нимә? Аптырап ҡалдығыҙмы тағы ла? Бында һеҙ түгел, мин ғәжәпләнергә тейеш. Танымайһығыҙмы әллә дуҫтарығыҙҙы?

— Таныуын таныйбыҙ ҙа ул, тик ниңә улар бында тығыҙ ғына?

— Ә мин уныһын да аңланым шикелле, — тине Айбулат. — Былар саф башҡорт хәрефтәре!

— Берәү таныған, имеш, ниңә башта уҡ әйтмәнең, улайһа? — Салауат Айбулаттың белдекле булыуын оҡшатып етмәне, ахырыһы.

— Шауламағыҙ! Хәҙер барыһын да аңлатам. Һеҙ әле мөғжизәле баҡсаға килеп ингәнһегеҙ, малайҙар! Унда теләһә кем керә алмай! — Самабай һүҙен дауам итте.

— Ә кемдәр генә инә ала һуң? Мине улар тотҡарланы, между прочим. — Хансура үҙенең инә алмай тороуын иҫенә төшөрөп, был һорауҙы бирмәй түҙмәне.

— Һеҙгә бында, моғайын, бик йылы, бик уңайлы, бик рәхәттер, шулаймы?

— Эйе!!! — тине малайҙар бер тауыштан.

— Бының сәбәбе, — тип дауам итте Самабай, — һеҙ үҙегеҙҙең туған телегеҙҙең йөрәгенә килеп индегеҙ! Туған телегеҙ шуға ла рәхмәтен әйтеп, яҡты нурҙарына ҡойондора. Киләсәктә ул һеҙгә шундай мөмкинлектәр асыр, бөгөн быны хатта күҙ алдына ла килтерә алмайһығыҙ!

— Мин күҙ алдына килтерәм ул: әсәй әйтә, туған телен белмәгән кешеләрҙең Йыһан менән бәйләнеше өҙөлә һәм улар төрлө яман сирҙәргә дусар була тип! — Айбулат әсәһен маҡтап телгә алырға теләне, күрәһең.

— Ҡалай һинең әсәйең дөрөҫ әйткән, Айбулат! Тимәк, ул бик шәп ғалимә! Бик күптәр үҙҙәренең ошо Йыһандағы бер өлөшсә, шул уҡ ваҡытта ата-бабалары тамырын дауам итеүсе икәнен аңлап та етмәй шул. Әгәр кеше үҙен тәби-



ғәттән айырым итеп хис итә башлай икән, уға Юғарынан көс килеүҙән туҡтай, кеше ҡояшһыҙ ҡалған гөл кеүек һулый.

Самабайҙы Салауат бүлдерҙе:

— Бөгөн ундайҙар күп тә инде?!.

— Үкенескә ҡаршы, Ер өҫтөндә йәшәйеш икенсе төрлө шул. Кешеләр тәбиғәткә Ер-әсә тип ҡарамай, ә унан ситләшә. Һөҙөмтәлә, Ер йөҙөндә төрлө һәләкәттәр булып тора. Асылыкүлдең төбөндә булдығыҙмы әле?

— Юҡ!!! — тине малайҙар.

— Минең булғым да килмәй! Бөтөнләй һыу яратмайым, әсәйем миңә һыу инергә лә ҡушмай, — тине Хансура.

— Эй башты ҡатырҙы инде ошо! Ҡайҙан ғына эйәртеп алдым? — Салауат дуҫының даими рәүештә мыжып тороуына тағы ла баҫым яһаны.

— Сеү! Сеү! Малайҙар, һеҙ хәҙер бер атҡа — маҡсатҡа егелгән, шуға ла ҡарағыҙ уны: бары дуҫ булһағыҙ ғына тауҙың сере асылыр!

— Анауында, бейеккә ҡарағыҙ әле! Күрәһегеҙме кеше һындарын?! Улар туған телдәренә булған һөйөүҙәре менән ҙур эштәр атҡарған, олуғ маҡсаттарға ирешкәндәрҙең рухы.

— Улар барыһы ла үлгәнме ни? — тип һораны Айбулат.

— Эйе, улар мәңгелеккә күскән. Бында «Башҡорт хәрефтәре баҡсаһы» күгендә фанилыҡтан киткәндәрҙең рухы сағыла, — тип аңлатты Самабай.

— Ә минең тел белгесе булғым килмәй! — Салауаттың яуабы ҡәтғи булды.

— Ә телде ололау өсөн мотлаҡ тел белгесе, уҡытыусы, ғалим булыу мөһим түгел!

— Нисек инде???

— Бына бит һеҙ башҡортса матур итеп һөйләшәһегеҙ, ул да телде ололауға, уны хөрмәт итеүгә тиң!

— Ә ниңә баҡса мине индермәй торҙо икән, Самабай? — Хансура үҙен борсоған һорауҙы тағы ҡабатланы.

— Әллә инде, — тип йылмайҙы Самабай. — Үҙең ни уйлайһың һуң?

— Белмәйемсе? Бәлки, минең атайым ҡала егете булғанға был хәрефтәр мине танымайҙыр? Ул бит йүнләп башҡортса һөйләшә лә белмәй, әсәйем Учалынан алып килгән бер иҫке китапта ата-әсәләренең ҡылыҡтары баланың йәшәйешенә йоғонто яһай, тип яҙылғайны. Атайым һөйләшә белмәгәс, улар мине лә танымағандыр, может? — Хансура яурындарын һелкетте.

— Эш шунда ғынамы икән?

— Ә һин ниңә гелән һөйләшкәндә рус һүҙҙәрен ҡыҫтыраһың ул, ә? — Салауат ҡапыл тоҡанып киткәндәй итте.

— Һөйләшһә ни! Мин бит ниңә дәрестән ҡасаһың, тип һинең башыңды ҡатырмайым. — Хансура менән Салауат йәнә әләгешеп китте. Шул саҡ Айбулат уларҙың иғтибарын икенсе нәмәгә йүнәлтте:

— Ағай, ҡарәле, Хансураның башынан да, һинең башыңдан да әллә ниндәй нурҙар күтәрелә ул! Минекендә бармы? — Малайҙар көрмәкләшеүҙән туҡтап, бер-берεһенә ҡараштылар. Ысынлап та, уларҙың башынан тулҡын-тулҡын булып нурҙар урғыла ине. Әлбиттә, был күренеште лә башта аңламайыраҡ торҙолар, әммә Самабай ниҙер әйткәнсе, Айбулат һөйләп ҡалырға тырышты:

— Былар бит Самабай баяғы әйткән беҙҙе тоташтырып тороусы нурҙар!!!

Әлбиттә, һәр кемгә үҙенекен байҡау мөмкин дә түгел ине, әммә башҡаларҙың Йыһан менән бәйләнешен малайҙар ап-асыҡ күрҙе. Нурҙар, әйтерһең, әллә ҡайҙан Күк



төпкөләнән килеп, малайҙар аша хатта ер аҫтына юллана. Ап-аруҡ ваҡыт улар бер-берεһенең нурланып торған баштарын күҙәтте.

— Ғәжәп, берәйһе төшөмдә күрҙем тип һөйләһә лә ышанмаҫ инем. Бына нисек икән Йыһан менән бәйләнеш!!! — Салауат был һүҙҙәрҙе әйткәндә үҙендә ниндәйҙер әлегә тиклем тойолмаған көс артыуын да һиҙҙе. Шул саҡ малайҙар Хансураның башына килеп етеп, әйтерһең, инә алмай ыҙаланған нурҙарҙың кире ҡаҡлығыуын күреп ҡалды. Был ни тағы, тип аптыраманы улар. Барыһы ла көн кеүек асыҡ ине: биологик зат булараҡ, Кеше Күк, Ер менән бәйләнешен юғалтырға теләмәһә, һәр саҡ тыуған телендә таҙа итеп һөйләшергә тейеш. Самабайға бер ни ҙә аңлатырға кәрәкмәне.

Хансура, электр сымына эләккән кеше һымаҡ, әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа борғолана, үрһәләнә башланы, ул үҙе менән ни булғанын белмәне.

— Ярай әле дуҫығыҙ башҡорт телен белә, әгәр бөтөнләй аңламаһа, ошо тау эсендә тороп ҡалыр ине!

— ???

Салауат менән Айбулаттың иҫе китте. Улар быны көтмәгәйне.

— Эйе, егеттәр, ваҡытлыса Хансураны ошонда ҡалдырып торорға тейеш булаһығыҙ! Һеҙ тау ҡуйынынан сығыу юлын тапҡансы, ул тыуған телендә таҙа итеп һөйләшергә өйрәнәсәк!

Малайҙар дуҫтарын ҡотҡарырға ташланды, әммә ул күҙгә күренмәгән быяла ҡоршау менән уратылғайны инде. Салауат әллә күпме шаҡып та, тибеп тә ҡараны, әммә Хансура уларҙы ишетмәне. Айбулат ҡурҡышынан илап ебәрҙе.

— Хансура! Хансура! Ишетәһеңме беҙҙе?

— Күрмәй ул һеҙҙе!

— Нисек инде күрмәй? Беҙ улай тип килешмәнек һинең менән, Самабай?! — Салауат ҡыҙып китте. — Унһыҙ бер ҡайҙа ла, бер аҙым да атламайбыҙ! Йәнә лә — ниңә әле беҙ һиңә һәр саҡ ышанырға тейеш?

— Ышанмағыҙ һуң! Әммә ошо килеш уны тауҙан алып сыҡһағыҙ, ул ауырыу булып ҡаласаҡ!

— Ауырыу? Ә ниңә? Ул бит сирле малай түгел!. — Айбулат та бик ныҡ ҡыҙғанды Хансураны.

— Яҙмыш ҡушыуы буйынсамы, һеҙҙең саҡырыу менәнме, белмәйем, әммә ул «Башҡорт хәрефтәре баҡсаһы»на килеп эләкте. Кем белә, был, бәлки, уның бәхетелер?! Әгәр ошонда башҡорт теленә сит һүҙҙәр ҡушмай һөйләшергә өйрәнә икән, тау уға мәрхәмәтен күрһәтер! Киләсәктә ул бик ҙур табип булыр! — тине Самабай.

— Ә һин хәҙер күрәҙәсе ләме ни? Ҡарәле һин уны, беҙ ышанып, бөтә эсебеҙҙе бушатабыҙ, ә ул тауға бикләп, беҙҙән теге кемде әле, Айбулат, онотам да ҡуям шуны? Һуң кемде тим мин һиңә? Ана шул табипты эшләргә уйлай, имеш, — Салауат тау ҡуйынында белем алған боронғо ғалимды иҫенә төшөрә алманы.

— Әбүғалисинаны әйтәһеңме ни, ағай?

— Эйе, шул-шул!

— Һин юҡҡа ярһыма, Салауат, егет кешегә был килешкән эш түгел! Әлегә тиклем минең һеҙгә зыяным теймәне, әгәр сабырлыҡ менән тау ғәмәлдәрен атҡарһағыҙ, һеҙ бит ҙур мораҭҡа ирешәсәкһегеҙ! — Самабай малайҙарҙы тынысландырырға тырышты.

— Улайһа, беҙгә ни эшләргә һуң, Самабай?! — Айбулат үҙен ике уртала ҡалған кеүек хис итте.



— Ә һеҙ баҡсаның башҡа урындарын да ҡарай тороғоҙ! Унда Мәңгелек ағасы бар! — тип кәңәш итте үлән буйлыҡ йән эйәһе.

— Ҡара уны, әгәр беҙҙе, дуҫтарын ташлап киттеләр тип, бер-беребеҙҙән айырып, башыбыҙҙы ашарға уйлайһығыҙ икән, ни эшләргә белермен! Әлегә әйтмәй торам, — тине Салауат.

Малайҙар Хансураның ҡулына китап алып, нимәлер уҡый башлауына ғәжәпһенеп ҡарап торҙо ла, баҡсаның икенсе башында ултырған ҙур мөһабәт ағас янына юлланды. Юлда улар тәрән упҡын ситенән үтте. Шул саҡ уларҙы бер тотам ҡалдырмаған Самабай былай тине:

— Ана, тегендә упҡын төбөндә ятҡан кешеләрҙе күрәһегеҙме?

— Эйе! — Һүҙе яңғыраны бер тауыштан.

— Улар тап телде белмәүҙәре арҡаһында яман сиргә дусар булған.

— Нисек инде?

— Бына шулай, хөрмәтле Тау ҡунаҡтары! Телде кешеләр аралашыу ҡоралы ғына тип уйлай, улай түгел шул. Телдең иң төп бурысы — кешеләрҙең рухи сәләмәтлеген һаҡлау! Туған телендәге һүҙҙәрҙең, өндәрҙең моңо етмәү сәбәпле, кешеләргә кәрәкле Йыһан көсө, ата-бабалары рухы, тулы ҡанлы энергия килеп етмәй. Шунан уларҙың әле теге, әле был ерҙәре сырхай башлай. Хатта туған телендәге бер генә өн дә әллә нисәмә сирҙән дауа була ала. Яҙмышты һынарға ярамай, ата-бабаларҙан мираҫ булып ҡалған телде яратырға, һаҡларға кәрәк!

— Бына нисек икән? Мин был хаҡта Интернеттан бер мәҡәлә уҡығайным ул. Әйткәндәй, тап туған телдәрҙе өйрәнеү — ул Киләсәктең рухи сәләмәтлеге, тип яҙа

Америкала йәшәгән беҙҙең ил ғалимы, — тип өҫтәп ҡуйҙы Айбулат.

— Шул инде, иң шәп Рәсәй ғалимдары Америкала көс түгә, быны барыһы ла белә, — тигән булды Салауат. — Тик шуныһы аңлашылмай: ниңә уларҙың ауырыу йәндәре хәҙер бында ла ыҙа сигә?

— Улар әле таҙарыныу этабын үтә, шунан һуң «Башҡорт хәрефтәре баҡсаһы»на килеп телде өйрәнәсәктәр! Телде белмәү был Тауҙа иң ҙур гонаһтарҙың береһе һанала.

— Хансура рус һүҙҙәрен ҡыҫтырып ҡына һөйләй, шуға күрә, моғайын, уға өйрәнеү ауыр бирелмәҫ, эйе бит, ағай?! — Айбулат артына боролоп ҡараны. Йыраҡта, быяла бина һымаҡ баҡсала, Хансура китаптарға ҡапланып нимәлер уҡый ине. Янында бер кеше лә хасил булған.

— Уныһы кем тағы? Ағай, Хансура янына кемдер ингән?! — Айбулат ағаһына өндәште.

Салауат һорау ҡатыш аптыраған ҡарашын Самабайға төбәне.

— Борсолмағыҙ, дуҫығыҙға ғалим Әбүғәлим дәрестәр бирә! Күрерһегеҙ, ул бик матур итеп туған телендә һөйләшергә өйрәнер!

Малайҙар яҙмыштарына күнгән ҡиәфәттә, арттарына ҡарана-ҡарана, әллә ҡайҙан күренеп торған ҙур ағасҡа табан атланы. Ә ул яҡынайған һайын ҙурайҙы, яҡынайған һайын киңәйҙе. Үҙ ғүмерҙәрендә бындай ағас күргәндәре лә юҡ ине. Әйтерһең, уның тамырҙары Ерҙең теге яғынан күренеп тора, ә иң остағы япраҡтары Күккә тейә төҫлө. Юҡҡа ғына Мәңгелек ағасы тип атамағандар! Ул, моғайын, бында донъя яралғандан бирле торалыр, шулай булмаһа, был тиклем үҫергә нисәмә йыл кәрәк!

— Был ағасты башҡорт телендә һөйләшкән тәүге ир-егет ултыртҡан, тиҙәр. Бына күрәһегеҙме телегеҙҙең ниндәй





боронғо һәм сал икәнлеген? — тине Самабай. — Уның тамырҙары бик тәрәнгә барып тоташа. Шуға күрә лә башҡорт теле донъялағы иң боронғо телдәрҙең береһе һанала.

— Ә был ағасты урап сығырға нисә көн кәрәк? — тип һораны Салауат.

— Нисә көн кәрәк? — Самабай көлөп ебәрҙе. — Әллә урап сығырға уйлайһығыҙмы? Юҡ, бына быныһы килеп сыҡмаҫ, дуҫтарым, һеҙ ағасты урағансы, ҡарт бабайға әүерелеүегеҙ ихтимал. Хатта меңдән бер өлөш юлды үткән хәлдә лә, ҡартайырһығыҙ! Иң мөһиме — телегеҙҙең ағасы тере! Һеҙ уны үҙ күҙегеҙ менән күрҙегеҙ — был бик һирәктәр өлөшөнә төшкән бәхет!

— Ә ниңә ҡойолған япраҡтары ла күп ул? — тип һораны Салауат.

— Моғайын, телдә онотолған һүҙҙәр барҙыр? — тине Айбулат.

— Эйе, тап шулай. Туған телегеҙҙең онотолған һүҙҙәре, ҡарағыҙ әле, бихисап бит! Уларҙы тергеҙергә кәрәк, был телдең Мәңгелек ағасын тағы ла йәшәртеп ебәрер!

— Ә нишләп ул ағас тел ағасы тип аталмай, Самабай, барыбер «Башҡорт хәрефтәре баҡсаһы»нда бит? — тип ҡыҙыҡһынды Айбулат.

— Бик аҡыллы малайҙар икән һеҙ. Айбулат, дөрөҫ һорау бирәһең. Кешеләр башта һөйләшә лә белмәгән, әммә донъяның иң ғәжәп, һоҡландырғыс күренеше — тел барлыҡҡа килгән. Аң, зиһен, рух, күңел үҫешенә иң ҙур тәьҫир итеүсе көс — ул тел! Шуға күрә Кешелектең мәңгелек ғүмере лә тап телгә бәйле. Тел йәшәй икән, халыҡ та, милләт тә, кеше лә йәшәй. Ул — Мәңгелек ағасы.

— Ә туған телен бөтөнләй белмәһә лә, бер ҙә сырхамаған кешеләр бар! Быны нисек аңлатаһың, Самабай? — тип һорап ҡуйҙы Айбулат.



— Һәр нәмәнең үҙ ваҡыты. Мин бит шундуҡ сиргә һабышырға тейештәр тимәнем. Бына ҡарағыҙ әле Мәңгелек ағасына! Тамырҙары бик тәрәндә, шул уҡ ваҡытта уның иң осондағы япраҡтарын беҙ күрә алмайбыҙ. Ана шуның кеүек, телен онотҡан кеше үҙен рухи ағасының тамырҙарынан, йәки ата-бабалары рухынан көс алыуҙан мәхрүм итә. Иртәме-һуңмы был күренеш кире һөҙөмтә бирә, үкенескә ҡаршы. Тарихи китаптар уҡырға, олатай-өләсәйҙәр һөйләгәненә ҡолаҡ һалырға ғына кәрәк, барыһы ла яҡшы буласаҡ!

Бөгөн һис уйламағанда, көтмәгәндә бәндәләр төрлө яман сирҙәргә дусар була, төрлө һәләкәттәргә тарый, уларҙың күпселегенең сәбәбе — тамырҙарға тоғролоҡто һаҡламауҙан килә. Японияла, Ҡытайҙа сирлеләр аҙ икәнен беләһегеҙме?

— Эйе, был хаҡта Интернетта уҡыған бар! — Салауат шулай тине.

— Интернетта мәғлүмәт бик күп һәм төрлө бит, уларҙың һәр береһенә ышанып бөтөп тә булмай, — тип ҡаршы төштө Айбулат.

— Әйткәндәй, һеҙ Тауҙың Интернет залында булманығыҙ бит әле ул, эйе бит?

— Юҡ!!! Уныһы нимә тағы? — Айбулат аптырап китте.

— Һин әле Асылыкүлдең төбөн һөйләйһең, әле Интернет залы хаҡында, ә үҙең дуҫыбыҙҙы ҡотҡарып, бынан тиҙерәк сығыу юлын күрһәтергә ашыҡмайһың?! — тине Салауат Самабайға, ризаһыҙлығын белдереп.

— Һәр нәмәнең үҙ ваҡыты тип әйттем бит, дуҫтарым! Көтөгөҙ, сабыр итегеҙ! Тимәк, һеҙҙең мажаралар башлана ғына әле!

— Нимә? Башлана ғына??? Нисек инде, беҙ бында мажара эҙләп килмәнек!.. — Салауат йәнә әрепләшергә уйланы.

— Мажара эҙләп килмәнек, тигән була бит әле ул. Ай-һай, Салауат, һинең бит күҙҙәреңдә яҙылған дәртле, дарманлы булыуың! Кем кем, әммә һин мажараларҙан баш тартмаҫ инең, тип уйлайым! — Самабай көлөп ебәрҙе.

Бер уйлаһаң, ысынлап та, Салауат тап үҙе ошонда ынтылды, туғанын, дуҫын әйҙәне.

— Самабай, ағайым ғына сәбәпсе түгел беҙҙең бында булыуға, мин дә тауға барайыҡ тип бик ялындым! — Айбулат уңайһыҙланып ҡына башын эйҙе...

— Йә, ярай, ҡунаҡтар, һеҙ Мәңгелек ағасы менән аралаша торoғоҙ, ә дуҫығыҙ янына барырға мөмкин булғанлығын һеҙгә хәбәр итерҙәр, моғайын. Хуш булығыҙ әлегә! — Самабай нисек хасил булһа, йәнә шулай уҡ юҡҡа сыҡты.

Малайҙар Мәңгелек ағасы тирәләй һөйләшә-серләшә уны өйрәнде.

— Ағай, беләһеңме минең башҡа ниндәй идея килде?

— Ниндәй? Ошо ағастың орлоғон алып, үҙебеҙҙең баҡсала сәсергә тип уйламағанһыңдыр ул?

— Әйткәндәй, уны ла эшләргә була инде. Әммә мин «Башҡорт хәрефтәре баҡсаһы»н күргәндән һуң, ошондай уҡ баҡсаны үҙебеҙҙең баш ҡалала булдырыу хаҡында хыяллана башланым әле!!! — Айбулаттың күҙҙәре янып китте быны әйткәндә.

— Шәп идея ла ул, туғаным!

— Һәр хәлдә Өфөлә ундай баҡса булмаһа ла, беҙҙең гимназияла музей эшләргә була ла инде, эйе бит?!

— Теләһәң, һәр башҡорт ҡалаһында хәрефтәребеҙҙе данлап, һәйкәл ҡуйырға мөмкин! Тик бер әтнәкәһе бар, Айбулат, һәйкәлде үлгәндәргә генә ҡуялар түгелме һуң?!

— Юҡ, үлгәндәргә генә түгел, һәйкәл бит ул мәңгеләштереү, данлау тигән һүҙ, шуға күрә, мәҫәлән, Өфөлә



башҡорт хәрефтәренән торған ҙур бер баҡса булһа, унда уйын ҡаласығы ла урынлаштырырға була. Балаларҙы, йәғни беҙҙе, ылыҡтырыр өсөн, — тине лә Айбулат йылмайып ебәрҙе.

— Балаларҙы, беҙҙе, тиһең инде?! — Малайҙар Тау әсендә тәүге тапҡыр ихластан көлөп ебәрҙе. Уларҙың гөрләшеүен кемдеңдер тамаҡ ҡырыуы бүлде:

— Баянан бирле өндәшәм, илтифат итмәй тораһығыҙ! — Малайҙар әйләнеп ҡарап Хансураны күргәс, уның ҡосағына ташланды.

— Хансура!!! — Улар әллә нисәмә йыл күрешмәгән кешеләр һымаҡ, ҡосаҡлашып иҫәнләште.

— Көтмәгәйнегеҙме әллә? Оҙаҡ булдым шул мин «Башҡорт теле» мәктәбендә. Биш йыл уҡыттылар ҙа ҡуйҙылар бит! — Хансура үҙгәреп киткән кеүек тойолдо ағалы-ҡустылыларға.

— Биш йыл? Һин шаяраһыңмы әллә?

— Юҡ, һис тә шаярмайым. Мин унда теүәл биш йыл уҡыным.

— Улай булғас, беҙ биш йыл буйы ашамай торҙоҡмони? — тип аптыраны Айбулат.

— Белмәйем, мине унда ашаттылар ул.

— Хәйер, нимәһенә аптырарға инде, бында ваҡыт үлсәме башҡа шул, — Салауат ғәжәпһенһә лә, Тау ҡуйынындағы тормошҡа өйрәнә башлауын күрһәтте.

— Һин беҙгә өндәшкәндә әллә ниндәй һүҙ әйттең ул? Мин шуны аңламаным, — тип һораны Айбулат.

— Әллә тағы? Ә нимә тинем һуң әле ул мин? — Хансура иҫенә төшөрөргә тырышты. — Ә-ә-ә, илтифат итмәй тораһығыҙ тинем!

— Ә ул ни тигән һүҙ тағы? Ишеткәнем бар, әммә мәғәнәһенә төшөнөп бөтмәйем!

— Иғтибар итмәй тораһығыҙ тигән мәғәнәлә ул. Илтифат — ихтирам, иғтибар күрһәтеү тигән һүҙ. Һүҙҙәрҙең күплеге!!! Мине һәр башҡорт һүҙенең мәғәнәһен аңларға өйрәттеләр. О-о-о! Беҙҙең телгә әллә күпмеләре йоҡмай йәшәй икән, улай тип әйтеп булһа әле. Ҡулланылмағас, ул бит үлгән тигән һүҙ, шуға күрә мөмкин тиклем телебеҙҙәге һүҙҙәрҙең ҡулланылышын киңәйтергә кәрәк! — Хансура ярһып-ярһып күргән-белгәндәрен дуҫтарына еткерергә ашыкты. — Ә беләһегеҙме, һеҙҙән һорау алмай тороп, мине хатта унан сығармайбыҙ тигәйнеләр әле.

— Ниндәй һорау алыу тағы? Аптыратаһың һин беҙҙе! — Салауат ҡыҙыҡһынып баҡты Хансураға.

— Саф башҡорт хәрефтәренә башланған етешәр һүҙ әйтергә кәрәк, тиҙәр. Был эште һеҙҙең тиҙ атҡарып сыға аласағығыҙҙы беләм бит инде, шуға тоттом да үҙем әйтеп ҡарайым тинем. Мәҫәлән: «Ә» хәрефе! Әсәй, әтәс, әрем, әрәмә, әлморон, әрһеҙ, әрәм. Етәү булды шикелле, эйе бит!

— Ҡалай һине бик еңел уҡытҡандар ул, ә! Ундай мәктәптә мин дә биш йылды тиҙ уҡып сығыр инем, экстерн менән генә! — Салауат көлөп ебәрҙе.

— Ә «Ҫ» хәрефенә ете һүҙҙе ҡайҙан таптың? — тип һораны Айбулат.



— Вәт һорауҙы бирҙең, исмаһам? Ни арала уйлап таптың уны? — Хансура аптырап ҡалды.

— Ә мин был хаҡта гелән уйланғаным бар. Шунан «Ҫ» хәрефенә берәй һүҙ ишеткең килһә, Дәүләкәнгә ҡайт, тип көлдөрә Гөлнур өләсәйем.



— Эйе, уныһы шулай. Баҡтиһәң, «Ҫ» хәрефе бик боронғо телдәрҙә генә ҡалған. Шуға ла «Ҫ» хәрефенә башланған һүҙҙәр күп түгел, әммә бар. Беҙгә уларҙы табырға кәрәк!

— Нимәһен эҙләйһең инде уның, хәҙер өләсәйем янына ҡайтып етһәк, бөтә һүҙҙәр ҙә «Ҫ» хәрефенән башланасаҡ! Ишеткәнең юҡмы ни ошо таҡмаҡты:

*Ҫыу буйына*
*Ҫуған сәстем,*
*Ҫеңлем, сығып*
*Ҫыуҙар ҫип! —*

Салауат түҙмәне, үҙе лә көлөп ебәрҙе.

— Улай икән дә, әйтәм, миңә ул һүҙҙәрҙе телдең диалектынан эҙләргә ҡуштылар! Ә шулай ҙа, малайҙар, беләһегеҙме, «Һ», «Ҫ» һәм «Ң» өндәре бик ҙур көскә эйә икән, уларҙы әйткәндә, кешенең бөтә эске органдары таҙара, тип аңлатты уҡытыусым.

— «Ө» хәрефенә ете һүҙ әйтеп ҡарағым килә! — тине Айбулат һәм башланы ла: — Өрөк, өмөт, өс, өҫ, өрлөк, өлгө, өрәк!

— Һуңғыһын әйтмәһәң дә була ине! — Салауат ян-яғына ҡаранып алды. — Улайһа, мин дә «Ҡ» хәрефен барлайым әле: ҡурсаҡ, ҡурҡаҡ, ҡабаҡ, ҡаҙаҡ, ҡараҡ, ҡырпаҡ, ҡара... «Ҡ»-ға һүҙҙәр бик күп икән дә — еңел табылды.

— Малайҙар, ҡарағыҙ әле алға, унда компьютерҙар түгелме? — Хансура атлап барышлай бейек тауҙарға беркетелгән мониторҙарҙы күреп ҡалып, дуҫтарына ымланы.

— ???

— !!!

— Бына һиңә мә!!! Беҙҙең ноутбук та шунда түгелме икән, ағай?!

— Бәлки... Кем белә, бәлки, был тауҙар аша әсәй, атай, өләсәйем менән бәйләнешкә сығып булыр?

Малайҙар асыҡ торған ҙур мониторҙарға ҡапланды...

## Донъялағы иң шәп компьютер

Малайҙарҙың ҡыуанысының сиге булманы. Ҡарәле һин уны, тау аҫты донъяһы тигән булалар, ә бында ла компьютерҙар бар икән дә баһа!

Ялтырап, уттары әллә ҡайҙан балҡып күренеп торған замана машиналары һәр береһенең күңелендә ниндәйҙер өмөт тә уятты, шул уҡ ваҡытта мәктәптән һуң йәки дәрестән ҡасып уйнарға ратҡан уйындары менән осрашыуҙан шатлыҡ тойғоһон да тергеҙҙе.

— Ағай, ҡарәле, бында бит мониторҙар иҫ киткес ҡеүәтле! Бөтә нәмә шул тиклем ап-асыҡ күренә, әйтерһең, Интернет селтәре лә түгел, ә тәҙрә һымаҡ! — Айбулаттың ғәжәпләнеүенең сиге булманы.

— Эйе шул! Әйҙә, бер туйғансы уйнап алайыҡ әле, ялҡытып китте юл эҙләп йөрөп. — Салауат иң беренсе компьютерға барып ултырҙы.

— Һеҙ артыҡ ныҡ мауығып китмәгеҙ инде. Салауат, һин бит анау футболды уйнай башлаһаң, донъяңды онотаһың! — Хансура дуҫтарының Интернетҡа битараф түгеллеген яҡшы белә, шуға күрә уларҙың артыҡ ҡыуаныуынан хатта хәүефләнеп тә китте.

Ысынлап та, Интернет залындағы машиналар бик үҙенсәлекле булып сыҡты, улар уйын артынан уйын тәҡдим итте, яңынан-яңы мәрәйҙәр, бүләктәр бирҙе. Хансура күҙ ҡырыйы менән генә Айбулаттың тәҙрәһенә күҙ һалды. Ҡараһа, малай әллә ниндәй программалар йыйып, тау аҫтынан сығыу юлын эҙләй!



— Һин ни эшләйһең ул, Айбулат?

— Мин хәҙер һеҙҙең икегеҙҙе лә таң ҡалдырасаҡмын.

— Нисек итеп?

— Нисек? Нисек? Хәҙер бына ошо машина беҙҙе үҙе үк Гөлнур өләсәйемдең өйөнә илтеп ҡуясаҡ!

— Һин нимә, Айбулат? Был бит компьютер! Салауат, ҡарәле, Айбулат унда әллә ниҙәр эшләй! — Хансура ниҙер һиҙенде.

— Нимә эшләһен инде ул ботаник?! Берәй формула уйлап тапҡандыр! Әллә әсәйҙең кредитын ҡапларлыҡ аҡса эшләүсе машина таптыңмы, бәләкәс? — тип һораны Салауат һәм туғанына әйләнеп ҡарап, уны танымады.

Малайҙарҙың күҙ алдында Айбулат ҡарт бабайға, һаҡаллы кешегә әйләнде.

— Әй, һин нимә эшләйһең бында??? Һин нимә эшләнең, Айбулат? — Ағай кеше ҡустыһын мониторҙан тартып алырға тырышып ҡараны, әммә ул тамыр йәйгән кеүек ҡатып ҡалғайны һәм бөтөнләй аңлайышһыҙ телдә ниҙер һөйләнде.

— Был ни хәл? Хәҙер нимә эшләйбеҙ инде? — Хансураны ҡурҡыу солғап алды.

— Әйҙә икәүләп тартып ҡарайыҡ был урындан! Әллә ҡайҙан килеп керҙек бит ошонда! — Салауат ҡустыһын төрлөсә тартҡылап ҡараны, әммә ул бер нәмә лә өндәшмәне, улар яғына әйләнеп тә ҡараманы. Киреһенсә, арбалған әҙәм кеүек, экранға нығыраҡ ҡапланды, ниндәйҙер аңлайышһыҙ телдә һүҙҙәр ысҡындырғыланы, шашып көлдө.

Малайҙар ергә ултырҙы. Улар хәлдең бындай боролош алырын көтмәгәйне. Ни эшләргә?

— Ул бер вирус эләктергән компьютер һымаҡ тота үҙен, — тине Хансура.

— Ниндәй вирус ти? Өйҙә шулай бит ул: берәй тема бирһәләр өйгә эшкә, шуны компьютерҙан ҡарай ҙа, аҙаҡ үҙе әҙләй башлай сисеү юлдарын. Велосипедты яңынан уйлап табыу нимәгә кәрәк??? Нимәгә? Баш ҡатырғыс әҙәм! — Салауаттың ярһыуының сиге булманы. Ул тәрән уйға батты, йоҙроғо менән ергә бәреп алды. Шул саҡ ҡапыл кемдеңдер:

— Ул тиклем ныҡ һуҡма, ауырта ла инде, — тигән тауышы ҡолаҡтарына салынды. Малайҙар бер-береһенә ҡарашты. Ишетелгәндәй булды, күрәһең, тип, яңынан әңгәмәләшеп киттеләр.

— Бала-саға! Бына хәҙер уның арҡаһында ҡайта алмай ултыр инде! Беҙ сығыр юлға табан атлайбыҙ тип уйлағайным! — Салауат йәнә ергә йоҙроҡлап бәреп алды. Баяғы тауыш йәнә ҡабатланды.

— Кем булды һуң ул? — Хансура ҡарашын ергә төбәне. Үлән араһында улар йәшендәге бер малай ята, имеш!

— Һин кем? — тине үҫмерҙәр бер тауыштан.

— Мин? — Ергә һылашып тигәндәй ятҡан үҫмер тороп баҫты: — Мин Ербатыр булам.

— Ә һин бында нишләйһең? — Салауат мыҡты кәүҙәле тиҫтерен күреп, уны баштан-аяҡ ҡарап сыҡты.

— Мин — үҙ еремдә, ә һеҙ бында ни эшләп йөрөйһөгөҙ? Малайҙар ни тип әйтергә белмәне.

— Беҙ ни бында... аҙашып килеп сыҡтыҡ! — тине Салауат.

— Аҙашып??? Юҡ, инде, егеттәр, һеҙ мине алдай алмаҫһығыҙ! Тау эсенә аҙашып килеп инеп булмай! — Үҫмер үҙен ҡыйыу тотто.

— Була. Беҙ бында инербеҙ тип уйламағайныҡ та. Атлай торғас, тауға менге килеп китте... шунан тау эсенә





инге килде... шунан... бына беҙ бында... аҙаштыҡ... — Хансура башын түбән эйҙе.

— Нимә? Әллә беҙ һиңә оҡшамайбыҙмы? — Салауат һыр бирмәҫкә тырышты.

— Оҡшамайбыҙмы әллә тиһеңме? Бәлки, оҡшамайһығыҙҙыр? Ә ниңә әле миңә баштары әйләнгән кешеләр оҡшарға тейеш? — Ербатыр үҙен тағы ла ҡыйыуыраҡ тотто.

— Һиңә оҡшамайбыҙ тип кенә бынан сығып китә алмайбыҙ шул! Етмәһә, хәҙер ҡустым да бында... — Салауат Айбулат яғына күҙ һалып алды. Ул хәҙер бөтөнләй бер йөҙ йәшлек ҡарт һымаҡ ине. Малай башын ике ҡулы менән ҡыҫып, ҡысҡырып ебәргәнен һиҙмәй ҙә ҡалды.

— Айбулат! Иҫһеҙ!!! Ни эшләнең һин?

— Ни эшләнең тиһеңме? Һеҙҙең кеүек Интернет арҡаһында хәтерен, аҡылын юйғандарҙың аңын, зиһенен бында көн дә килтереп түгәләр ул, — тине Ербатыр.

— Нимә? Аҡылын юйғандар тиһеңме? — Малайҙар был һүҙҙе ишетеп, аптырап китте.

— Эйе! Һеҙ ҙә шул Интернет менән мауығып, кешелек сифатын юғалтҡан малайҙар түгелме һуң? Мин һеҙҙең ҡыланыштарығыҙға ҡарап, шундайҙарҙың бер төркөмө икән, тип уйланым.

— Туҡта әле, дуҫҡай! Әйтсәле һин беҙгә: беҙ ҡайҙа? — Салауат йәнә ян-яғына ҡаранды.

— Һеҙме? Һеҙ аң-зиһен сүплегендә! Ә миңә ошо Ҡаяның хужаһы, бәлки, уларҙан яңынан кеше яһап булыр тип, ерҙә тәгәрәтеп уйнатырға, ер эштәрен өйрәтергә ҡуша.

— Сүплектә? — Хансура Салауаттың еңенән тартып, Айбулат яғына ымланы. Ҡусты кеше унда бөтөнләй сүгеп



ҡалған бер бабайға әйләнгәйне, ә үҙе һаман Интернетта нимәлер соҡой, эҙләй.

— Туҡта әле, һинең исемең кем? Мин Салауат булам. Был — минең дуҫым Хансура. Ана теге бөйөк компьютерщик — минең ҡустым.

— Мин Ербатыр булам тип әйттем дә инде. Исемем шулай.

— Һин беҙгә ярҙам ит, улайһа. Ҡустымды кире кеше ҡиәфәтенә ҡайтарайыҡ. — Салауат үтенесле ҡараш менән баҡты яңы танышына.

— Ой-ой! Уға ярҙам итеп булмаҫ! Бик ныҡ бирешкән бит. Етмәһә, ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында. Нишләп шул тиклем компьютер менән мауыға һуң? — тип һораны Ербатыр.

— Ул мауыҡмай. Айбулат бик башлы малай! — тине Хансура.

— Эйе, эйе! Ҡустым бик уҡымышлы, тик бына ошо нәмә аша әллә ниндәй программа эҙләйем тине лә, эсенә инде лә китте. — Салауаттың тауышында үҙен ғәйепле итеп тойоу ауазы ла бар ине.

— Һеҙгә ярҙам итер өсөн, уны мониторҙан айырып алырға кәрәк! — тине Ербатыр.

— Тартып ала алһам, мин һинән ярҙам һорап та тормаҫ инем. — Салауат тамам төшөнкөлөккә бирелде.

— Әйҙәгеҙ әле, тағы ла һөйрәп ҡарағыҙ, бәлки, берәй нәмә килеп сығыр?

Салауат уйланғансы, Хансура барҙы ла Айбулатты мониторҙан ҡутара башланы. Әллә ниндәй шартлаған тауыштар ишетелгәндәй итте.

— Салауат, нишләп тораһың? Әйҙә, компьютеры менән бергә тартып алайыҡ! — тип тәҡдим итте Хансура.

— Әйҙә, һин дә! — тип өндәште Салауат Ербатырға.

— Унда инә алмайым! Компьютерҙан айырылып, бында сығып йөрөй башлаһалар ғына мин улар менән эш башлайым. Ә һинең ҡустың унда нык йәбешкән!!!

Салауат Айбулатты йән көсөнә тартты! Ҡапыл ҡая таштары ҡутарылып, Айбулат та компьютеры менән ҡуша ергә барып төштө. Әкиәттәге һымаҡ, уның йөҙ-ҡиәфәте күҙ алдында үҙгәрҙе. Элекке хәленә ҡайтты. Әммә ҡулдары компьютерҙан ысҡынмағайны әле.

— Ой, нимә булды ул? Мин ҡайҙа, ағай? — Уның тәүге һүҙҙәре шул булды.

— Ҡайҙа? Ҡайҙа, имеш? Айҙа!!! Ҡабат компьютерға яҡын килерһеңме икән? — Салауат туғанының элекке ҡиәфәтенә ҡайтыуына шат ине, йәнә, уға бер-икене ҡундырып та алғыһы килде. Әммә тыйылды. Ситтәр янында бер-берегеҙҙе ҡыйырһытмағыҙ, тип өйрәтәләр бит уларҙы өйҙә.

— Малайҙар, ҡарағыҙ әле! Был нимә ул? — Хансура ҡысҡырып уҡ ебәрҙе.

— Кешенең баш һөйәге? Мейеһе? — Салауат та, туғанының ҡулындағы сәйер нәмәгә ҡарап, шаҡ ҡатты.

— Ой!!! Был нимә ул? — Айбулат әйләнеп йүгерә башланы һәм ҡулы йәбешкән нәмәнән бармаҡтарын ысҡындырырға маташты.

— Берәй доға уҡы! Бая белә инең бит тау эсенә ингәндә! — тип өйрәтте Хансура.

*— Яҡшылыҡ булһын атығыҙ!*
*Кеше булһын затығыҙ!*
*Яҡшынан баш тартмағыҙ!*
*Яманға юл ҡуймағыҙ! —*

Айбулат тиҙ-тиҙ генә ошо юлдарҙы ҡабатланы.





— Һин нимә? Был бит доға түгел! — Салауат берсә туғаны уҡыған шиғыр юлдарын танып ғәжәпләнде, берсә, Айбулаттың ҡулынан баяғы баш һөйәге ҡабыҡ кеүек әрселеп төшөүен күреп, шаҡ ҡатты.

— Доға, ағай, доға! Беҙгә башҡорт теле уҡытыусыһы, «Урал батыр» эпосы Ҡөрьәнгә тиң әҫәр, уның һәр юлы доға кеүек, тигәйне. Күрәһең бит — ул хаҡлы! — Айбулат таҙарынып, еңеләйеп киткәндәй хис итте үҙен.

— Эйе, был бит теге мәктәп менән ятлаған эпостан өҙөк. Ҡарәле һин уны нисек тәьҫир итә икән, ә?! Доға уҡы, тип юрый ғына, ҡурҡыштан әйткәйнем, — тип көлөп ебәрҙе Хансура.

Малайҙар ҡосаҡлашты. Ерҙә ятҡан баш һөйәгенә күҙ һалдылар. Улар, әйтерһең, был мәлдә бөтәһе лә бер уйҙа ине.

— Аптырайым, нисек итеп килеп эләкте минең ҡулға был һөйәк? Кемдеке икән? — Айбулат ҡараштарын әле ағаһына, әле Хансураға төбәне һәм шул саҡ ситтә генә йылмайып торған таныш түгел үҫмерҙе күреп ҡалды. — Ә был кем?

— Был — Ербатыр! Ошонда йәшәй. Аңдары, зиһендәре зарар күреүселәрҙе ер эше менән дауалайым, тине ул беҙгә, ҡустым! — тип аңлатты Салауат. Ербатыр шул саҡ үҙе һүҙгә ҡушылды.

— Ҡарап-ҡарап торам да һеҙгә, малайҙар, тағы бер тапҡыр ғәжәпләнеп ҡуям!

— Ә нимәгә???

— Һеҙ Айбулаттың ҡулына баш һөйәге нисек килеп эләккәнен барыбер аңламанығыҙ.

— Ә нисек һуң? — тип һораны иң кеселәре.

— Һин нимә менән шөғөлләнә инең һуң? — Ербатыр һорау биреү юлы менән хәҡиҡәтте табырға ярҙам итергә булды.



— Мин? Мин ни... теге компьютерҙа уйнай инем, шул саҡ «Урал батыр» эпосы нигеҙендә бер Интернет уйыны уйлап сығарырға булдым һәм геройҙарҙы майҙанда теркәй башлағайным... Шунан... Меңйәшәр ҡарт менән аралаша ғына башлағайным... Артабан хәтерләмәйем дә... — Айбулат уйға ҡалды.

— Ярай, быныһы аңлашылды. Ә ни сәбәпле һинең ҡулыңа кеше башы һөйәге килеп эләкте? — тип һораны Ербатыр.

— Ана шуны бергә ялғай алмай торам!

— Мин төшөнә башланым шикелле. Беҙ Айбулатты ҡаянан компьютер менән бергә тартып алдыҡ, — тип башланы Салауат.

— Эйе, эйе! Уның ҡулында ҡаялағы компьютер ине, — тине Хансура, ниҙер аңлағандай итеп.

— Тимәк! Шунан, шунан, дауам итегеҙ! — тип ашыҡтырҙы Ербатыр.

— Барыһын да аңланым, — тине Айбулат. — Минең ҡулымда кеше башының һөйәге түгел, ә компьютер ул. Йәғни, кешенең мейеһе — донъялағы иң ҡеүәтле компьютер!

— Вәт һиңә мә!!! Кисә үлһәм, бөгөн белмәҫ инем, тигән кеүек булып сыҡты бит был! — тине Салауат.

— Мин нимәләр ишеткәнем бар ине, әммә бындай хәлгә тап булырмын, тип уйламағайным. Йығылып китерлек бит әй! — Хансура Ербатырға ҡараны.

— Эйе, Айбулат, һин бик дөрөҫ аңланың! Донъяның иң шәп компьютеры — ул кешенең баш мейеһе. Техниканы ғалимдар тап кешенең башы миҫалында эшләгән, — тине Ербатыр. — Кешенең башында нимә бар, барыһы ла компьютерҙа булдырылған. Хатта ҡолаҡтар ҙа, күҙҙәр ҙә бар.

Хәтер, мейенең һоро шыйыҡсаһы тураһында әйтеп тә тормайым.

— Ә ниңә минең программам боҙолдо? — тине Айбулат.

— Бәлки, һин ашығып яңылыш клавишаға баҫҡанһыңдыр?

— Кем белһен инде хәҙер. Мин бит «Урал батыр» эпосы геройҙары менән уйын ҡорорға теләгәйнем, — тине, үкенгән тауыш менән.

— Хәҙер аңлашыла инде һинең ниңә секунд һайын ҡартайғаның! — тип көлөп ебәрҙе Салауат.

— Нисек? — Айбулат, киреһенсә, бер ни ҙә аңламаны.

— Шул Меңйәшәр ҡарт ҡиәфәтенә инеп бөткәйнең бит инде! — Ағай кеше тағы ла йылмайып ҡуйҙы.

— ?..

— Эйе, эйе, хатта беҙ һине танымаҫлыҡ сүрәткә ингәйнең! — тип Салауаттың һүҙен ҡеүәтләне Хансура.

— Мин тап ул ҡарттың функцияларын етештерә башлағайным шул, — тине Айбулат.

— Компьютер менән артыҡ мауығырға ярамағанлығын беләһегеҙ бит! Ә ниңә шаярырға? — тине Ербатыр.

— Ул бит ботаник! Уға мотлаҡ үҙенсә берәй нәмә уйлап табырға, үҙенсә эшләргә кәрәк! Бәләкәйҙән өйҙәге бөтә нәмәне үҙе һүтеп, кире йыя, — тине Салауат. Малайҙар тағы ла көлөштө.

— Хатта күңелһеҙ булып китте әле: компьютер асылмаҫ сер тигән кеүегерәк уй менән йәшәһәм, баҡтиһәң, ул башымдан бер нәмәһе менән дә айырылмай! Эх!!! — тине Айбулат.

— Айырыла! Кем әйтте һиңә уны айырылмай тип? — тине Ербатыр.

— Айырыла? Ә нимәһе менән? — Айбулаттың күҙҙәре янып китте.



— Һине бит бик-бик башлы тиҙәр, әйҙә, үҙең тап яуапты! — Ербатыр үләнгә барып ятты.

— Кешеләрҙең компьютер һымаҡ төймәләре юҡ! — тине Салауат.

— Төймәләрҙе ҡуйыуы оҙаҡмы ни? Таптығыҙ сәбәп! — Ербатыр йомған күҙен дә асманы.

— Түгел, түгел, ағай, ашыҡма, хәҙер әйтәм! — Айбулат бик етди уйланды.

— Компьютер электр энергияһы ярҙамында эшләй, ә кешегә ул кәрәкмәй! — тине Хансура.

— Һуң, туҡтағыҙ әле, туҡтағыҙ, яуап бирергә ирек бирмәйһегеҙ! — Айбулат ярһып китте.

— Уйла, уйла, егет! Ашыҡма. «Икеле» ҡуймам, әммә аҡыллыбаш тигән даның булғас, моғайын, яуабын табырһың? — Ербатыр күҙен аса биреп кенә Айбулатҡа ҡарап алды. Бер ни тиклем уйланып торғандан һуң, малай, ҡәнәғәт йылмайып, яуап тапҡанлығын белдереп көлөп ебәрҙе.

— Белдем! Белдем! Бары тик шунда ғына айырма: компьютерҙы кеше уйлап тапҡан, ул алдан билдәләнгән программа менән эшләй, шуға мөмкинлектәре сикле. Ә бына кешене Юғары көс бар иткән, уға махсус программа һалынмаған, бары тик изгелек ҡыл тип, ергә ебәрелгән, шуға ла кешеләрҙең мөмкинлеге сикһеҙ! Уларҙың башындағы уй секунд эсендә алышыныуы, хыялы әллә ҡайҙарға әйҙәүе ихтимал! Шулаймы, Ербатыр?

— Ысынлап, ҡалай һин башлы малай, Айбулат! — тине тороп баҫып, уның һөйләгәндәрен иҫе китеп тыңлаған бындағы хужа. — Мауығып китеп уйнай башлағас, һине компьютер сире менән яфаланыусы сираттағы бер үҫмер икән тип уйланым. Хәҙер бит күптәр Интернет менән ауырый. Был тәү ҡарамаҡҡа хәүефһеҙ тойолһа ла, бик

ҡурҡыныс сир. Беренсенән, уйлап табылған кеше мейеһе аналогы, йәғни компьютер, кешенең тере мейеһен киптерә, уның энергияһы менән туҡлана. Һөҙөмтәлә, кешеләрҙең хәле булмай, башы ауырый, төрлө дауалап булмаҫлыҡ яман сирҙәргә дусар була.

— Һин уларға нисек ярҙам итәһең һуң, Ербатыр?

— Кеше бит тәбиғәт балаһы! Ул ерҙе тойоп, ергә баҫып атлап йөрөргә тейеш! Бында килгәндәрҙе ергә һалып, унан көс алып, тере энергия менән һуғарып дауалайбыҙ. Ер менән шөғөлләнәбеҙ. Ергә ни тиклем көсөңдө һалһаң, ул һиңә шул тиклемде кире ҡайтара. Ер кешене көслө итә, — тине Ербатыр.

— Бына беҙ ҡалала ергә баҫып йөрөмәйбеҙ. Беҙгә нишләргә һуң? — тип һораны Салауат.

— Эйе, бик урынлы һорау бирҙең, дуҫым! Дөрөҫөн әйткәндә, ергә баҫмаған, ауылды күрмәгән балаларҙы бик йәлләйем мин. Улар бит тереклеккә, биологик затҡа хас булған тормоштан мәхрүм! — тине Ербатыр, күҙенә йәш тулғанын да йәшермәй.

— Ә беҙ ауылға ҡайтып китеп бара инек, белгең килһә! — тине Хансура. — Бына быларҙың өләсәһенә. Балҡантау эсенә килеп эләгеп кенә юлдан яҙҙыҡ.

— Һин нимә бында үкенгән кеүек һөйләп тораһың? Әгәр ошонда килеп кермәһәк, ҡайҙан был тиклем мәғлүмәтте алыр инең, ә? — тип ҡысҡырынҡырап өндәште Салауат дуҫына.

— Һуң, һаман сыға алмайбыҙ ҙа баһа. Ҡайтҡым килә минең Өфөгә! — тимәһенме Хансура.

— Өфөгә? Эйе, һеҙҙең Өфөгөҙ бик бай ҡалалыр инде. Унан көнөнә унар меңләп баланы бында мейеһен төҙәтергә алып киләләр, сөнки баштары тик Интернет тип кенә тора! — тип көлдө Ербатыр.



— Ҡарәле, Ербатыр, мин, ысынлап та, Өфөлә тиҙерәк арыйым. Әле һин әйткәс, уйлап ҡуйҙым, ергә баҫып, унан көс алып йөрөмәгәс, хәлем тиҙ бөтәлер инде, — тине Айбулат.

— Тап шулай! Ергә баҫып йөрөгән кеше унан көс ала, тәбиғәт менән туранан-тура бәйләнештә йәшәй. Шуға күрә ҡалала йәшәһәгеҙ ҙә, ауылдарға йышыраҡ барығыҙ, парктарҙа йүгерегеҙ! Һеҙгә бит әле йәшәргә лә йәшәргә! — тип яҡшы кәңәштәрен бирҙе Ербатыр. — Ә баяғынаҡ доға урынына «Урал батыр» эпосын ятлауың бик уңышлы булды. Хатта бик шәп аҙым булғандыр әле, сөнки һин уҡыған юлдар үҙеңде тиҙ арала Интернет ҡоллоғонан азат итте.

— Ҡоллоғонан? Азат итте? Бына һиңә мә! Тимәк, мин үҙемдең башым була тороп, кемдер уйлап тапҡан мейенең ҡоло булғанмын?! — тип аптыраны Айбулат. — Шуныһы үкенес, тулыһынса ятламағанмын ул боронғо эпосты, бәлки, бынан сығып китер юлды ла күрһәтер ине «Урал батыр»?!

— Ә һин үҙенән һора! — тине Ербатыр, һис аптырамайынса.

— Нисек инде үҙенән? Тағы ла Интернет ашамы? Юҡ инде, оҡшап етмәй миңә был тәкдим! — тине Айбулат.

— Миңә лә ҡыҙыҡ түгел. Ә бына Урал батырҙың үҙе менән осрашып, унан һораһаң, вәт исмаһам, ҡыҙыҡ булыр ине! — тине Салауат.

— Юҡ инде, етер мажаралар. Ҡайтыу юлын эҙләйек! — тип ҡаршы төштө Хансура.

— Ә ниңә, бәлки, Урал батыр беҙгә юлды үҙе күрһәтер? — тине Салауат.

— Бының булыуы бик ихтимал. Кисә генә күрше тау артында күреп ҡалғайным уны, — тине Ербатыр, күҙен дә йоммайынса.

— Был әллә беҙҙе алдаштыра инде, ә, малайҙар? — Хансура ниндәйҙер шик-хәүеф менән баҡты Ербатыр яғына.

— Һәм нимә эшләп йөрөй ине ул Дәүләкән районында Урал аръяғы егете? — тине Салауат. — Белдем, моғайын, Заятүләк менән осрашыуға килгәндер?

— Уныһы ла булыуы бик ихтимал! Тик, киреһенсә, Бэтмен, Кеше-Үрмәксе үҙҙәре Урал батырҙы эҙләп килеп һораған, ана-а-ау тауҙы күрәһегеҙме, шул яҡҡа табан юл өйрәтеп ебәрҙем, — тине Ербатыр. Малайҙар ултыра төштө.

— Берәйегеҙ мине семетегеҙ әле. Әллә насар төш күрәм, әллә һаташам, нимә булды ул? — тине Хансура.

— Юҡ-юҡ, төш түгел был, Хансура. Тик бына был малай ғына нишләптер беҙҙе иҫәргә һанай кеүек тойола башланы миңә! — Салауат еңдәрен һыҙғанды. — Һин нимә беҙҙең хис-тойғолар менән уйнаһың, ә? — Ул күп уйлап торманы, Ербатырҙы ҡолата һуҡты ла ҡуйҙы. Тик тегенеһе ергә ауыуы булды, ер уны үҙе күтәреп аяғына баҫтырҙы. Көсөргәнешле хәл килеп тыуғанын Өфө малайҙары бик яҡшы аңланы. Шуға тағы ла ҡул күтәреш башлана-нитә ҡалһа тип, Хансура — Ербатырҙы, Айбулат ағаһын барып ҡосаҡланы.

— Бындай хәлдең булғаны юҡ ине әле. Бына һиңә мә! Һеҙҙе тыйнаҡ ҡына дуҫтарым икән тиһәм... Юҡ, юҡ, һинең дуҫың менән һуғышырға йыйынмайым, ныҡ тотма улай, — тине Ербатыр, Хансураның ҡосағынан ысҡынып.

— Үҙеңде көслөрәк һанайһың инде, шуға, имеш, һуғышмайһың! — тип бәйләнде Салауат.

— Юҡ, бөтөнләй улай уйламайым. Тик шуныһын беләм: ергә тырнаҡ осом ғына тейһә лә, ҡабат тереләсәкмен, сөнки мин — кешеләрҙең беренсел сифаттарын һаҡлаған был тауҙағы берҙән-бер үҫмер! Һиңә асыуланмайым,



Салауат. Бәлки, үҙемде дөрөҫ тотмағанмындыр, — тине Ербатыр өҫтөн ҡаға-ҡаға.

— Дөрөҫ тотмаған, имеш. Шәп үҫмер икән бер әү! Ярай, уныһына ла ышандыҡ, ти! Тик ниңә һин Урал батырҙы күрҙем тип, беҙҙе лә, теге телегеройҙарҙы ла алдайһың? — Салауат өҙмәне лә ҡуйманы.

— Ә мин һеҙҙе алдамайым. Анау тауға ғына күҙ ташлағыҙ әле. Сәмреғошта кем осоп килә һуң был яҡҡа? — тине Ербатыр. Айбулат ҡысҡырып уҡ ебәрҙе:

— Ағай, был бит, ысынлап та, Урал батыр!

— Урал батыр? — Хансура йығылып китә яҙҙы.

— Урал батыр?! Тик нисек килеп сыҡты икән ул был ергә?

Урал батыр сәмреғошта яйлап ҡына һауа иңләп осоп йөрөй ине, тик әлегә малайҙар янына килергә ашыҡманы. Ошо урында үҫмерҙәр, Ербатыр менән хушлашып, юлын дауам итте. Яңы таныштары уларға Урал батырҙы күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа ҡушты.

## Асылыкүлдең төбө

Бик ҡыҙыҡлы булып сыҡты малайҙар өсөн тауҙың эсе. Урал батырҙың ҡайһы яҡҡа табан осоуын күҙәтеп бара торғас, малайҙар икенсе ҡыҙыҡлы урынға килеп еткәндәрен һиҙмәй ҙә ҡалды. Самабай, Асылыкүлдең төбөндә булдығыҙмы, тип юҡҡа һорамаған икән. Улар Нора тауы яғына килеп сыҡты. Бына һиңә ғәжәп! Балҡантау эсендә башҡа тауҙар ҙа бар икән!

— Ағай, Гөлбикә шишмәһе күлдең теге яғында ул. Яҡшы хәтерләйһеңдер? — тине Айбулат.

— Эйе, — тине Салауат һәм ул яҡҡа йөҙөп сығыуы оҙаҡ буласағын аңлап, яр ситендә торған кәмәгә ымланы.

Малайҙар ишә башлауы булды, әллә ҡайҙан күл өҫтөндә дауыл ҡупты һәм улар, һис көтмәгәндә, һыуға сумдылар. Был мәлдә һәр берене күңеленән нимә кисергәндер, әммә яҡты донъя менән хушлашҡандай итһәләр ҙә, күл төбөндә осоп йөрөгәндән һуң, малайҙар ҙур бер һарай алдына килеп туҡтаны.

— Ой-ой!! Һеҙҙең менән ҡабат юлға сыҡһаммы? Миңә бит һыуҙа оҙаҡ торорға ярамай, аллергия. Ғөмүмән, һыуҙан ҡурҡам, — тине Хансура.

— Шыңшыма әле. Бында, әйтерһең, беҙ ҡурҡманыҡ. — Салауат дарҫ-дорҫ типкән йөрәген тотоп ҡараны.

— Заятүләк тә ошо рәүешле һыу аҫтында батмайынса, тонсоҡмайынса йөрөгәндер инде, — тине ул.

— Шуныһы ҡыҙыҡ: ул Һыуһылыуҙы юллап килеп төшкән. Ә беҙ ни эшләйбеҙ һуң бында? — тине Хансура.

— Ана киләләр түгелме? Хәҙер аңлатырҙар! — тине Айбулат.

Ылымыҡтарҙан кейенгән, ҡулдарына һөңгө тотҡан һалдаттар пәйҙә булды малайҙар алдында. Салауаттың бер ҙә генә бирешкеһе, ҡулға алынған кеүек тотҡоһо килмәне үҙен.

— Һеҙгә нимә кәрәк? — тип үк ебәрҙе ул.

— Һыу батшаһы үҙенә саҡыра! — тине һалдаттар һәм уларҙы һарайға алып инеп тә китте.

Бына мөғжизә! Әкиәттәрҙәге кеүек тәхеттә Һыу батшаһы ултыра. Малайҙарҙы индереү менән, ул ғәскәренә, сығып торорғоҙ, тигәнде аңлатып, ҡул һелтәне.

— Һаумыһығыҙ, Ер егеттәре!

— Һаулыҡҡа һаубыҙ! Әммә һыу аҫтында нисек тын алғаныбыҙҙы һәм ни өсөн бында килеп сыҡҡаныбыҙҙы үҙебеҙ ҙә аңлап етмәйбеҙ, — тине Салауат.

— Мин үтенеп һораным һеҙҙе бында алып килеүҙәрен! Шишмәнән һыу эсеү теләге ул әүрәткес кенә ине. Үҙ хәлемде кемгә булһа ла һөйләргә тейешмен дә инде! — тине Һыу батшаһы, ярһып китеп.

— Ҡалай ҡыҙыҡ! Һеҙ бит бында хужа. Беҙҙең һеҙгә нисек ярҙам итеүебеҙ ихтимал? Һаумыһығыҙ, Һыу батшаһы! — тине Айбулат. Хансура ла сәләмләне хужаны.

— Мин — һыу аҫтында хужа. Бына инде нисә быуат ер икегә ярылып киткәндән алып, ошонда — Асылыкүл төбөндә, һыуҙың үҙендә тәртип урынлаштырып йәшәйем. Дөрөҫөрәге, йәшәй инем... — Һыу батшаһы иламһырап ебәрҙе.

— Ә ни өсөн йәшәй инем? — Хансура шундуҡ һорауын бирә һалды.

— Һуңғы быуат ҡына мине бик ныҡ ҡаҡшатты. Бындай әшәкелекте, даръяһыҙлыҡты күргәнем дә булманы ошо йәшемә етеп.

— Ә һеҙгә нисә йәш һуң?

— Заятүләк Һыуһылыуҙы алып сығып киткәндә ете быуат йәшәгәйнем инде. Шунан һуң иҫәпләп тә торманым. Һыу аҫты батшалығының иң һылыу ҡыҙын ер өҫтөнә әйҙәне ул. Ярай уныһына ла күндек, тик бына быларына, бындай даръяһыҙлыҡҡа нисек түҙмәк кәрәк? — Һыу батшаһының күҙенән йәштәр сөбөрләне.

— Даръяһыҙлыҡ? Беҙгә был һүҙ таныш түгел. Нимәне аңлата ул? — Малайҙар бер тауыштан бирҙе был һорауҙы.

— Даръяһыҙлыҡмы? Беҙҙә иң ҙур фажиғәне, мәғәнәһеҙлекте шулай тиҙәр. Әгәр инде ни икәнен күргегеҙ килһә, рәхим итегеҙ келәтемә!

— Ә беҙ унда нишләйбеҙ? Һин, ой, Һеҙ беҙгә һүҙ менән аңлатығыҙ. Аңларға тырышырбыҙ. Келәттә нимә бар һуң? — тине Салауат.

— Келәттәме? Ана шул даръяһыҙлыҡтың «емештәре»! — тине Һыу батшаһы.

— Ағай, бәлки, беҙ ярҙам итә алырбыҙ. Әйҙә, инеп ҡарап сығайыҡ, кеше илай бит! — тине Айбулат.

— Кеше? Ниндәй кеше булайым мин һеҙгә? Кеше булырға яҙмаһын! Иң яҡшы кешеләр Заятүләк заманында уҡ китеп бөттөләр шикелле инде ул! — тип иламһыраны тағы ла батша.

— Кеше булырға яҙмаһын? Улайһа, һеҙ беҙҙе ниңә бында килтерҙегеҙ һуң? — тине Хансура.

— Өмөтһеҙ — кеше генә, тиҙәр беҙҙә борондан уҡ. Шулай ҙа Заятүләк тә кеше ине бит, изге күңелле ине тигән өмөт менән саҡырттым мин һеҙҙе.

— Нимә булған һуң ул, ә, аңламайым. Әкиәттәрҙә лә батшалар был тиклем илаҡ булмай, — тине Салауат.

— Ылымыҡтар! — Һыу батшаһы бер ылымыҡты тартып ебәреүе булды, баяғы ярандары килеп тә сыҡты. — Ҡунаҡтарҙы келәткә оҙатығыҙ!

— Нисек инде оҙатығыҙ?! Бармайбыҙ беҙ унда. Беҙгә ауылға ҡайтырға кәрәк, өләсәйебеҙ көтә, — тине Салауат.

— Башта минең келәтемде ҡарап сығығыҙ, шунан һөйләшербеҙ, — тине бая ғына күңеле тулып торған Һыу батшаһы, ҡаты итеп.

— Ағай, әйтәм бит ҡаршы өндәшмәйек, күрәйек келәтен, шунан ҡарарбыҙ, — тигән булды Айбулат.

— Күрәйек келәтен, күрәйек һыу аҫтын! Бынан сыға алмай ултырһаҡ, илама, йәме! — Салауат та ҡәтғи һөйләште.

Ярандар малайҙарҙы келәткә оҙатты. Ундағы тауҙарҙы күреп, уларҙың иҫе китте.

— Был нимә ул? Былар бында ҡайҙан килгән? — Хансураның күҙе түбәһенә менә яҙҙы.

— Был тиклем нәмәләр бында нисек йыйылған һуң? — Айбулат та ғәжәпләнде.





— Ә хәҙер ниңә батша беҙгә киләтен күрһәтергә теләгәне аңлашыла! — тине Салауат.

— Ниңә, ағай?

— Ана бит үҙе килә, моғайын, һөйләр.

— Йә, дуҫтарым, матурмы минең тауҙар? Һеҙ Балҡантау, Торатау тип янаһығыҙ. Ә бына миңә тауҙар тип янып торорға кәрәкмәй, кешеләр бик ныҡ ярҙам күрһәтә. — Һыу батшаһы тағы илай башланы.

— Нимә булды инде? — тине Хансура.

— Нимә, нимә? Аңламанығыҙмы ни? Ҡарағыҙ, был тауҙар нимәнән тора! — Салауат малайҙарға ишараланы. Шунда ғына Айбулат менән Хансура һыу аҫтындағы тауҙарҙың быяла һәм пластик шешәләрҙән, ҡағыҙҙарҙан, төрлө башҡа сүптәрҙән торғанын абайлап алды.

— Бына инде бер быуаттан ашыу тынғылыҡ таба алғаным юҡ. Кешеләр күл буйына килә лә бөтә ҡыйҙарын, кәрәк-кәрәкмәгән нәмәләрен ярға, һыуға ташлай. Ошо рәүешле күл аҫтында ете тау пәйҙә булды. Әйтегеҙ әле замандаштарығыҙға, ул тиклем яман ҡыланмаһындар. Һыу эйәһе кеше ҡәүеменә бик асыулы. Саманан тыш сүплек күбәйеп китһә, ул кешеләрҙе һыу төбөнә тартып төшөрөп, шул ҡыйҙарҙы кире ергә ташыта башлай. Әлегә берәү ҙә кире иҫән-һау әйләнеп ҡайта алғаны юҡ.

— Өләсәйем әйткәне бар шул, Асылыкүл олой, берәй кешене алырға итәме икән әллә, тип, — тине Айбулат.

— Ҡурҡытмағыҙ әле, ә? Былай ҙа сыға алырбыҙмы бынан, юҡмы, тип ултырам, — тине Хансура.

— Нисәмә быуат көттөм мин һеҙҙе!

— Әллә, ысынлап та, биклэп ҡуйырға уйлайһығыҙ инде? — Хансура тертләп китте.

— Юҡ, эш унда түгел. Балҡантау, Һыуһылыу ташы аша беҙгә килеүселәр хәҙер юҡ инде. Кешеләр бит әкиәткә түгел, риүәйәткә лә, эпосҡа ла ышанмай. Был бик аяныс күренеш. Шуға ла күлдең ҡәҙере юҡ. Әйтегеҙ, зинһар, замандаштарығыҙға — күлде бысратмаһындар. Үҙегеҙ күрҙегеҙ бит, һыу аҫты тулы сүп-сар тауҙары. Оҙаҡламай килэтемдә урын да ҡалмаясаҡ бит.

— Кешеләр беҙҙе ишетерме икән һуң? — тип хафаланды Айбулат.

— Ә һеҙ ишетелерлек итеп әйтегеҙ! Артҡа сигенер әмәл юҡ, әгәр артабан да шулай барһа, күлде был ерҙән алып китәм.

— Нисек инде алып китәм? — Малайҙар ғәжәп итте.

— Ер, Күк, Ут, Һыу хужаһы Аллаһ Тәғәләнең ҡөҙрәте киң, ярҙамынан ташламаҫ. Күл урынына сүплек ҡалыр, ә Асылыкүл икенсе урында пәйҙә булыр.

— Улай итмәй тор инде, Һыу батшаһы, беҙ мотлаҡ ҡайтып әйтербеҙ. Класташтарыбыҙ менән һыу буйын таҙартырға килербеҙ. Беҙҙең мәктәптә хәбәрселәр бар, гәзит-журналдарға мәҡәлә яҙырбыҙ! — тине Айбулат.

— Әйе шул! Әгәр ярҙам кәрәк икән, ниңә ҡулдан килгәнде эшләмәҫкә?! — тине Салауат.

— Ярҙам миңә түгел, һеҙгә кәрәк! — тине Һыу батшаһы. — Һыу эсендә ут ҡабыҙып ҡарағыҙ әле бына. Нисәмә йыл хәҙер ошо ҡыйҙарҙы яндырып ултырам. Бөтөрәләр күлемде, бөтөрәләр! — Һыу батшаһы тағы ла илап ебәрҙе.

— Ҡарағыҙ әле, анау шешәләр тауын! Ниңә шул тиклем бысраталар икән, ысынлап та. Был бит тәбиғәткә ҙур зыян! — тине Салауат. — Һеҙ иламағыҙ. Беҙҙең һыу аҫтында йөҙөүсе таныштарыбыҙ ҙа бар. Улар, моғайын, ярҙам итер.

— Ярай инде, олатай, ысынлап та, илама. Асылыкүлебеҙ ярҙарынан ташып китә бит хәҙер! — Ылымыҡтар араһынан килеп сыҡҡан бик матур ҡыҙыҡайҙы күреп, малайҙар таң ҡалды.

— Был кем? Ниндәй сибәр ҡыҙыҡай! — тине Хансура.

— Ысынлап та, бигерәк һылыу шул! Минең класташ Гөлназға оҡшап тора! – тип һоҡланды Айбулат.

— Эйе, Ер өҫтөндә лә бар шул бындай күркәм ҡыҙҙар! — тине Салауат, уның да күҙҙәре янып тора ине.

— Был минең меңәсәрем — Һылыуҡай! — тип таныштырҙы Һыу батшаһы.

— Меңәсәрем? Уныһы кем була тағы? — тип һораны малайҙар бер тауыштан.

— Меңенсе быуын ейәнсәрем.

— Танышып та өлгөрмәнем, хушлашырға ваҡыт етте. Был һиңә ерҙән бүләк! — тип Салауат Һылыуҡайға ҡылғанды тотторөуы булды, ул шунда уҡ ҡыҙҙың ҡулында сәскә атты ла ҡуйҙы.

— Ҡалай матур! — тине меңәсәр. — Һаумыһығыҙ, һау булығыҙ кеүек килеп сыҡты шул. Минең дә һеҙгә бүләк биргем килә. — Ҡыҙыҡай өс тапҡыр сәпәкәй итеүгә, уның алдында өс ҡабырсаҡ хасил булды. Ул һыу аҫты ҡомартҡыларын малайҙарға таратты.

— Заятүләк юҡҡа ғына һыу ҡыҙына һөйөклөм, тимәгән икән, эйе бит, ағай, — тине Айбулат.

— Ҡарәле һин уны, әллә был бәләкәс ғашиҡ булды инде? — тип көлөп ебәрҙе Хансура.

Хушлашыр мәл дә етте.

— Бөтә өмөтөм тик һеҙҙә генә. Ҡабатлап әйтәм, нисәмә тиҫтә йыл көттөм һеҙҙе. Әлегә хушығыҙ, ер егеттәре! Заятүләктәге кеүек мәрхәмәт кешеләрҙә юғалмаған икән. Анау суртан һеҙҙе Гөлбикә шишмәһе тапҡырына илтеп ҡуйыр! Рәхмәтем саф шишмәләр булып төшһөн! — тине лә Һыу батшаһы һарайына инеп тә китте.

— Хушығыҙ!

— Һау булып тор, Һыу батшаһы! Хуш, Һылыуҡай!





— Беҙ һеҙгә ярҙам итергә тырышырбыҙ!

Һылыуҡай малайҙар күҙ алдынан юғалғансы ҡул болғап ҡалды.

Суртан ҡунаҡтарҙы ел тиҙлеге менән Гөлбикә шишмәһе тапҡырына илтеп тә ҡуйҙы.

— Бөтә өмөтөм — йәш быуында. Улар ҙа Асылыкүлгә ҡул һелтәһә, алып ҡасам һыуҙы бынан, — тине Һыу батшаһы, малайҙар артынан ҡарап ҡалып.

## Ваҡытофон

Гөлбикә шишмәһенән рәхәтләнеп һыу эсеп, йыраҡ китеп тә өлгөрмәне малайҙар бик сәйер генә бер аҡланға барып сыҡты. Хәйер, тәү ҡарашҡа унда ғәжәпләнерлек бер ни

ҙә юҡ кеүек ине, әммә тора-бара кешеләрҙең уларға иғтибар итмәй үҙ эше менән шөғөлләнеүе, күмәкләшеп, теҙелешеп хор менән һүҙҙәр ҡабатлап, йырҙар йырлап үтеүе — малайҙарҙы тамам аптыратты.

— Был ни хәл? Ниңә улар бер ни өндәшмәй? Әллә беҙҙе күрмәйҙәрме? — тине Салауат.

— Мин дә шулай тип уйлайым, әгәр күрһәләр, барыбер боролоп булһа ла ҡарарҙар ине, — тине Хансура.

— Ағай, бәлки, беҙ күренмәй торған кешеләргә әйләнгәнбеҙҙер? — тине Айбулат күҙҙәрен таштырып.

— Нисек кенә булмаһын, бының бер ҡыҙығы ла юҡ. Һәр хәлдә, барыбер был хәлдән сығыу юлын табырға кәрәк бит!

— Анауында баҡсала бер үҫмер әллә ниҙәр эшләй. Әйҙәгеҙ, уның янына барып ҡарайыҡ!

Малайҙар күмәкләшеп бәрәңге баҡсаһында нимәлер соҡоған тиҫтере янына юлланды. Әлбиттә, бөтәһен дә бер үк уй солғап алды — әгәр ул да беҙҙе күрмәһә? Бер-береһенә ҡараштылар ҙа, бер ни өндәшмәнеләр.

— Һеҙ нишләп йөрөйһөгөҙ әле ул бында, ә? Тағы ла шул берәй сит ил делегацияһы балаларылыр инде. Уҡыу йылы тамам, йөрөмәгеҙ бында. Барығыҙ, барығыҙ, тайығыҙ. Бөгөн 30 май, һуңғы ҡыңғырау шылтыраны. Миңә нотоҡ уҡып йөрөмәгеҙ аҡыллы ҡиәфәт менән! — тип алдан уҡ юғары тонда һөйләшеп ҡаршы алды уларҙы малай.

— Тимәк, һин беҙҙе күрәһең! — Салауат башҡалар кеүек үк, ҡыуаныс менән әйтте был һүҙҙәрҙе.

— Нимә, һуҡырға оҡшағанмынмы әллә?

— Юҡ-юҡ, һин һуҡырға оҡшамағанһың да ул, тик бында беҙгә берәү ҙә өндәшмәй. Шуға аптырап ҡалдыҡ, — тине Айбулат.



— Өндәшмәй??? Ҡарағыҙ әле уны. Уларға берәү ҙә өндәшмәй икән, имеш. Бәлки, һеҙҙе һәр өй тапҡырында икмәк-тоҙ менән ҡаршы алырға кәрәктер? — Яңы таныштары бик төртмә телле булып сыҡты.

— Нимә бында әллә кем булып һөйләшәһең, ә? Беҙ ҙә һинең кеүек малайҙар инде. Нимә үҙеңде әллә кемгә ҡуяһың бында? Беҙ һинән ҡайҙа килеп эләктек ул, тип һорарға ғына иткәйнек! — тине Салауат.

— Ҡайҙа килеп эләктек? Уй, эсем... Көлдөрмәгеҙ, йәме. Имеш, улар халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның тыуған ауылында йөрөгәнен белмәй. Килештермәгеҙ, йәме. Белгегеҙ килһә, беҙҙең ауыл халҡы һеҙҙең кеүек ҡунаҡтарҙан арып бөткән. Республикаға кем килһә лә, тоталар ҙа беҙгә ебәрәләр, тоталар ҙа беҙҙән һыйлаталар... — тип кенә дауам иткәйне яңы таныштары, малайҙар тамам иҫтәре китте. Уларҙың аптырауы йөҙҙәренә сыҡты.

— Тимәк, беҙ әле Күгәрсен районында?

— Атыу белмәйһегеҙ?

— Бына ғәжәп!

— Шул һеҙ ҙә берәй түрә-ҡара балаларылыр әле. Фырт ҡына йөрөп ятҡан булаһығыҙ бында килештереп!

— Һин беҙгә улай бәйләнмә әле. Беҙ бит ярҙам һорап килдек! — тип әйтеп тә өлгөрмәне Хансура, яңы танышы уны бәреп тә осорҙо. Бына китте көрмәкләшеү! Салауат уларҙы саҡ айырып алды. Һәр кем үҙ алдына нимәлер һөйләнде, һуҡранды. Кем еңгәнен дә белермен тимә. Әммә Салауат тиҫтерҙәре булһа ла, был кәүҙәгә бик үк бейек булмаған малайҙың ҡеүәтле, көслө булыуын шәйләп ҡалды. Ҡара һин уны — нисек көрәшә. Хансураны ергә күтәреп бәрҙе бит! Ярай имгәнмәне.

Шул ваҡыт Айбулаттың кеҫәһендә нимәлер шылтыраған һымаҡ итте. Ул ҡулын костюмының эске кеҫәһенә тығып, иҫке кәрәҙле телефоны «телгә» килеүенә ғәжәп итте.

— Ағай, ҡарәле, теге ҡартайып бөткән «Нокия» шылтырап ятасы!

— Кем һуң унда?

— Әллә тағы, номеры билдәһеҙ бит!

— Туҡта әле, бәләкәс, ул телефон ватыҡ ине лә инде.

— Эйе, шуға уны төрлөсә ремонтларға тырышып ҡараным да, бөгөн информатика дәресенә алып килгәйнем. Бәлки, берәй эш сығарып булыр тип.

— Һуң, ал инде телефонды! Кемдер шылтырата бит!

— Алло! Кем әле был? Юҡ, мин Морат түгел. Бер ниндәй ҙә Моратты белмәйем. Минең атайым Морат, мин түгел. Мәҙинә апай! Ниндәй Мәҙинә апай? Минең ундай танышым юҡ. Аҡбулатова???

— Ағай, бында ниндәйҙер Мәҙинә Аҡбулатова шылтырата!!!

— Мәҙинә Аҡбулатова? Бир әле шул нәмәнде! Был бит минең әсәйем! — Яңы таныштары Айбулаттың ҡулынан телефонды тартып тигәндәй алды.

— Алло! Әсәй, сәләм! Эйе, мин өйҙә. Әй, юҡ, өйҙә түгел, баҡсала. Вәт шулай бына. Эйе, әй, юҡ. Юҡ, барманым мәктәпкә. Юҡ, һуң, әсәй, унда бит һуңғы ҡыңғырау! Ул ни йыл да бер төрлө шылтырай инде. Олатай менән өләсәй урманға китте. Эйе, бәрәңге утап йөрөйөм. Эйе, мин баҡсала. Нисек, нисек, бына шулай, баҡсала килеш һинең менән һөйләшәм. Бында сәйер генә малайҙар килеп керҙе лә, ошо ҡыҙыҡлы ғына бер нәмәне миңә тотторҙо. Юҡ, улар миңә теймәй. Һуң, әсәй, мин үҙебеҙҙең өйҙә лә инде. Юҡ, күмәк түгелдәр, өсәү генә.

— Аҡбулатова? Был бит Мәҙинә өләсәйҙең фамилияһы, ағай! — Айбулаттың күҙҙәре ҙурайғандан-ҙурайҙы!



— Мин дә шуны уйлап торам, туғаным! Нимә? Был малай беҙҙең атай булып сығамы ни?

— Әллә тағы? Бик ҡыҙыҡ, ивет?

— Ваҡыт тәгәрмәсе кирегә әйләнә башланы, тимәк, беҙҙең ҡайтыуыбыҙ бик икеле, — Хансура ауыр көрһөндө.

— Әсәй, ярай, эйе, ашаным мин, ашаным. Ярай, пока. Пока, мин киттем.

Яңы таныштарына хәҙер инде башҡа күҙ менән ҡараны малайҙар.

— Һинең атайың Миҙхәт, әсәйең Мәҙинә, шулаймы? — тине Салауат.

— О-о-о! Берәүҙәр хәҙер күрәҙәсе булып ҡыланмаҡсы була! Мине алдай алмаҫһығыҙ! Күрше инәйҙән һораштығыҙмы был хаҡта? — Яңы таныш бирешергә теләмәне.

— Эйе, һин Морат. Олатайыңды ла әйтә алабыҙ. Ағай, Мәҙинә өләсәйҙең атаһы Мансур, әсәһе Ғилминур бит.

— Шунан, уларын да белдегеҙ, ти? Бының менән мине аптырата алмаҫһығыҙ! Улай булғас, әйтегеҙ әле, мин йүгереү буйынса район ярышында нисәнсе урын алдым?

— Айбулат, атай нимә тип маҡтанырға ярата әле ул? Ә-ә-ә! Беренсе, әлбиттә!

— Хи, һеҙ быны былай ғына, яңылыш ҡына белдегеҙ.

— Беләһеңме, Морат, тип әйтергәме һиңә, әллә атай тиергәме инде... — Салауат көлөп үк ебәрҙе. — Әйҙә, көрәшеп ҡарайыҡ. Атай, көрәш буйынса тиҫтерҙәрем араһында мине берәү ҙә еңә алмай, тип маҡтана торғайны. Әйҙә, һынап ҡарайыҡ. Ауыл малайҙарының көсө бармы ни ул? — тип көлөмһөрәп әйтте Салауат.

— Әй, һин, самалап. Хәҙер ике таҫтамал алып сығам, шунан ҡарарбыҙ. Хәйер, мин һине былай ҙа еңә алам инде.

Салауат көлөп ебәрҙе:

— Айбулат, был беҙҙең атайға нык оҡшаған ул!

— Нишләп мин һеҙҙең атайығыҙ булайым, ә? Мин бит әле 7-се класта ғына уҡыйым. Берәй ун йылдан атай булған хәлдә, 2000 йыл етергә тейеш була! — тине Морат.

— 2000 йыл? Әле нисәнсе йыл һуң? — Көтөлмәгән ҡунаҡтар быны хор менән әйтте.

— 1989 йыл. Ә ниңә?

— Бына һиңә мә!!! Был бит ҡот осҡос хәл!!! — Хансураның сәстәре үрә торҙо.

— Әйттем бит, был беҙҙең атай, тип! Ҡалай ҡыҙыҡ! — Айбулат йылмайып ебәрҙе. — Ә һинең теге өйрәткән атың ҡайҙа? Һыҙғырып ебәр әле шуны саҡырып. Хәҙер әйтәм исемен! Хәҙер, бына тел осонда ғына ине... Керчь. Әйе, бына иҫкә төштө.

— Туҡтағыҙ әле, ә ул атты мин өйрәткәнде һеҙгә кем әйтте? Был бит сер! Әмирҙең генә эше. Туҡмала ул. Һатҡан, һатҡан. Әми-и-р! — тип ҡысҡырып ебәрҙе Морат.

— Юҡ, беҙгә ул әйтмәне. Беләһеңме, эш шунда, һиңә быны аңлауы ла ҡыйындыр инде, әммә беҙ икебеҙ — һинең улдарың. Киләсәгеңдән килдек һиңә! — тине Салауат. — Көрәшеп алғансы бер ҙур үтенесем бар. Күрһәт әле беҙгә шул атыңды. Атай гелән шул атын һөйләп алырға ярата. Тик уны аҙаҡ колхоздан урланылар, тине ул.

— Нисек урланылар? Кем? — Морат әсе итеп һыҙғырып ебәрҙе һәм алыҫтан сабып килгән ат тояғы тауыштары ишетелде. — Кем урлаһын уны? Урлап ҡына ҡараһындар! Ул бит минең тоғро дуҫым! — Морат үҙе атына ҡаршы йүгерҙе. Тегенеһе дуҫына алыҫтан сәләм биреп, елдә уйнаҡлап сапты.

Ҡала малайҙары иҫтәре китеп ҡарап торҙо был күренешкә! Бына һиңә мә!



— Тимәк, атай шаяртып һөйләмәгән. Ә мин уға ышанмай торғайным. Чечнянан иҫән-һау ҡайтһа, ғәфү үтенәсәкмен... — Салауат ауыр көрһөндө.

— Чечнянан? Һин үҙеңде уйла. Был тау эсенән иҫән-һау сыҡһам, тиң! Һеҙ үҙегеҙҙең ҡайҙа йөрөгәнегеҙҙе онотоп ебәрәһегеҙ, буғай! — Хансураға был хәлдәр бөтөнләй ҡыҙыҡ түгел ине. Уға хатта дуҫтары ҡыҙғаныс хәлдә кеүек тойолдо.

Ә Морат аты менән рәхәтләнде генә.

— Һыбай йөрөгәнегеҙ бармы? Әйҙәгеҙ, өйрәтәм, — тине ул. Салауат менән Айбулат атҡа менеп туғайлыҡ тирәһенән әйләнде. Малҡай ҙа ниҙер һиҙенгәндәй, уйнаҡламаны ла, ситкә сабырға ынтылманы.

— Һеҙ нимә, әллә Керчҡа берәй нәмә ҡаптырҙығыҙмы? Ҡалай тыңлаусан булып китте ул! — тигән булды Морат.

— Беҙ һинең менән көрәшеп ҡарайбыҙ, тигәйнек. Таҫтамалдарың ҡайҙа? — Салауат үҙенең тиҫтере йәшендәге атаһы менән көс һынашып ҡарарға теләне.

— Әйҙә һуң. Тик бер шартым бар. Әгәр еңһәм, һеҙ миңә анау нәмәгеҙҙе ҡалдыраһығыҙ! — тине Морат.

— Телефонды әйтәһеңме ни?

— Белмәйем нимә тип атала, әммә ауылда береһендә лә юҡ. Әсәйемә лә теләһә ҡайһы ваҡытта шылтыратып була.

— Ҡалдырыуын ҡалдырырбыҙ, тик батареяһы ултырғас, һөйләшеп булмаясаҡ. Ә зарядник өйҙә ҡалған, — тине Айбулат ғәйепле төҫ менән.

— Һуң тағы берәй көн эшләйме әле ул?

— Эшләргә тейеш!

— Миңә шул да етә. Килештекме?

— Килештек!

Салауат Моратты шунда уҡ күтәреп ергә ташлар һымаҡ тойғайны үҙен. Ни генә тимә, нисәмә йыл спорт мәктәбендә



шөғөлләнә. Әммә Мораттағы ниндәйҙер эске көс, тағыллыҡ бил бирмәне. Ап-аруҡ тегеләй-былай әйләнделәр, әммә бирәү ҙә бирешергә теләмәне. Шул ваҡыт Морат йән көсөн йыйып Салауатты күтәреп сөйҙө.

— Ни эшләйһең ул? Билде һындыраһың да инде! — Салауат йомшаҡ ҡына итеп һөрөлгән ергә барып төштө. Үҙен еңелеүсе итеп танығыһы килмәне. Морат уны ҡулынан тартып торғоҙҙо ла:

— Һин ҡайҙа көрәшергә өйрәндең? Мин былай оҙаҡ ыҙаланғаным юҡ ул, тиҫтерҙәремде шунда уҡ күтәрәм дә бәрәм, — тине.

— Өфөлә, спорт мәктәбендә ике йыл шөғөлләнгәйнем, — тигән булды Салауат.

— Ағай, һин бит көрәшкә оҙаҡ йөрөмәнең, футбол менән мауығаһың. Туп менән виртуоз хәрәкәттәр эшләй башлаһаң, атай һине еңә алмаясаҡ! — тип Салауатты ҡеүәтләргә тырышты Айбулат.

— Ниндәй атай булайым мин һеҙгә? Йә, берегеҙ ҙә теге һөйләшә торған нәмәгеҙҙе!

— Һөйләшә торған нәмә түгел ул. Ә шул уҡ телефон, тик кеҫә телефоны тип атала, — тип төҙәтте Хансура. Айбулат Моратҡа телефонды тотторҙо.

— Шунан, быны менән нисек ҡулланырға инде?

— Телефондағы шикелле һандарҙы йыяһың. Шул уҡ тәртип, — тине Айбулат.

— Әйҙә, көс һынашҡас, футбол буйынса ла ярышып ҡарайыҡ. Атай һәр саҡ, мин ауылдың иң шәп футболсыһы инем, ти торғайны. — Салауаттың тәкдиме булды был. Ул шунда уҡ ихата буйында ятҡан тупты алды, төрлө хәрәкәттәр эшләп уйната башланы. Морат башта аптырап ҡалды. Шунан иҫе китмәгән ҡиәфәт менән:

— Уны кем дә эшләр ул. Әйҙә, мин ҡапҡаға баҫам, гол индерә алырһыңмы?

— Һиңәме? Хет унды! — Салауат эре сиртте борсаҡты.

— Әйҙә, улайһа! — Малайҙар дүртәүләп футбол яланы яғына юлланды. Уны атайҙарының һөйләүе буйынса ла таный ине малайҙар. Ярыш сәме Хансураны ла урап үтмәне:

— Мин Салауат еңәсәгенә һис шикләнмәйем! — тине ул.

— Ун тибештән кем нисәүҙе индерә ала? Әгәр еңһәгеҙ, мин һеҙгә үҙемдең яратҡан бәкемде иҫтәлеккә бүләк итәм! — тине Морат.

Ярыш башланды. Салауат тәүге тибештә үк ҡапҡаға тупты индерҙе. Морат биреште. Ярыш аҙағына 8:2 иҫәбе менән Салауат еңеүсе тип табылды.

— Мин һинең ҡапҡаға унды ла индерә ала инем, тайып ҡына киттем, — тине Салауат.

— Мин дә!!! Әгәр аяғымда һинеке кеүек кеды булһа, мин дә шәп уйнар инем!

— Теләйһеңме, уны һиңә ҡалдырам. Ауылда иң крутойы булып йөрөрһөң! — Салауат ихлас әйтте был һүҙен.

— Юҡ, кәрәкмәй, шунан ҡайҙан алдың тип һораша башларҙар. Етмәһә, киләсәктән килгән өс иҫәр, тиһәм, үҙемде йүләргә сығарырҙар, — тине Морат. — Ә бына был бәке һиңә — Салауат бит әле исемең. — Малайҙар ҡосаҡлашты. Үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, күңелдәре тулды. Морат уларҙы аласыҡҡа алып инеп, үлән сәйе эсерҙе, ауыл икмәге, ҡаймаҡ менән һыйланы.

— Әллә нәмә булды ул. Мин күптән былай ихлас итеп аралашҡаным юҡ ине, — тине ул аҙаҡ.

— Беҙ һине мәңге онотмаясаҡбыҙ! Был күрешеү минең өсөн ҙур һабаҡ булды. Атайым бала сағында көсһөҙ генә ауыл малайы булған, юрамал маҡтана, тип уйлай торғайным, — тине Салауат.



— Ярай, атай, ой, Морат, һау бул. Беҙгә ҡуҙғалырға кәрәк. Рәхмәт һиңә.

— Һеҙ әллә ниҙәр һөйләнегеҙ инде мин атайығыҙ тип. Кем белә, бәлки, шулайҙыр. Нисек кенә булмаһын, һеҙҙең менән танышыуыма сикһеҙ шатмын! — тине Морат.

— Һин бик ҡунаҡсыл егет! — тип рәхмәтен белдерҙе Хансура.

Кәрешкә тауына тиклем оҙата барҙы Морат яңы дуҫтарын. Өндәшмәй генә атланы улар нишләптер. Ә инде тау башына менгәс, Салауаттың ҡулына ҡылған алыуы булды, Самабай уларҙы елдәй етеҙлек менән әллә ҡайҙа осороп алып та китте.

## Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, йәки асҡыс шәжәрәлә ята икән!

Малайҙар йәнә Урал батырҙы күреп ҡалған тау янына килеп төштө. Ә ул, әйтерһең, көтөп кенә торған: яндарына килеп тә етте. Улар барыһы ла ауыҙҙарын асҡан килеш тора бирҙе. Төшмө был, әллә ысын хәлме, тигәндәй, әле бер-беренә, әле мөһабәт һынлы Урал батырға ҡаранылар. Уның йөҙөнән аңлатып бөткөһөҙ нур, яҡтылыҡ бөркөлә ине. Салауат та, Айбулат та, Хансура ла Урал батырҙың шул тиклем яҡын, үҙ, ҡәҙерле икәнен тойҙолар. Тик бының нимәнән икәнен аңлата ғына алманылар.

Бәтмен, Кеше-Үрмәксе лә оҙаҡ көттөрмәне, ошо уҡ яланға осоп килеп төштө. Уларҙың йөҙөнә борсолоу, ғәжәпләнеү хистәре сыҡҡайны. Бындай боронғо һәм бөгөнгө заман геройҙары менән осрашыуҙы һис көтмәгән малайҙар саҡ телдән яҙманы. Бына һиңә, исмаһам, күрешеү! Бына һиңә Балҡантау! Бына һиңә мажара! Был хәлдә улар мәктәптәрендә һөйләһәләр ҙә, дуҫтарына сер итеп кенә әйтһәләр ҙә, ышанмаҫтар инде! Хатта ата-әсәләре ышанмаҫ

әле! Гөлнур өләсәләре генә ҡартайғанға һалышып, ышанған кеше булыр инде. Их, белһә ине улар малайҙарҙың ниндәй тетрәндергес хәлдәргә тарыуын!

Мәртәбәле, мөһабәт һынлы Урал батыр сәмреғоштан төшөп, малайҙарҙың һәр береһе менән ҡул биреп күреште. Үсмерҙәр тамам өнһөҙ ҡалды. Уңайһыҙ тынлыҡты батыр үҙе бүлде:

— Һеҙме ни ул ҡыйыу, ҡурҡыу белмәҫ егеттәр?

— Эйе, моғайын, тап уларҙыр, хөрмәтле Урал батыр! — тип һүҙгә ҡушылды ошо ерҙә оҙатып ҡалған Ербатыр.

— Ниәт итеп, маҡсат итеп килдем янығыҙға! Кинәйәм бар, ғилемем бар һеҙҙерергә аңығыҙға! — тине лә, ул иркен тын алып тирә-яҡҡа баҡты.

— Бөйөк Урал батыр, — тип телгә килде Салауат, — ә һиңә, ой, һеҙгә һорау бирергә буламы?

— Була, әлбиттә, хөрмәтле минең йәш дуҫтарым, ҡәҙерле вариҫтарым, миңә һин тип өндәшһәгеҙ ҙә ризамын, беҙҙең халҡыбыҙ үҙ күргәндәренә «һин» тип яҡын күреп өндәшергә ғәҙәтләнгән, — тине батыр.

Малайҙарға тын алыуы еңел булып китте. Улар миңә шул тиклем һиҫкәнеп, йөрәкһеп тороуҙарын үҙҙәре лә аңлай алманы хатта.

— Урал батыр, һин бит шул тиклем көслө, батырлығың быуаттарҙан ашҡан. Ә ниңә Бэтмен, Кеше-Үрмәксе тураһында фильмдар күп, ә һинең хаҡта юҡ? Мин һинең турала бар донъяның белгәнен бик теләр инем! — тип һораны Салауат. Тик уны Айбулат бүлдерҙе:

— Юҡ, уныһы беҙҙең эш! Мин төшөрәсәкмен Урал батыр хаҡында легенда итеп һөйләрлек фильмды!!! Мине бында икенсе нәмә аптырата — йәнһүрәт геройы менән кино геройының бында йөрөүе. Улар ҙа беҙҙең кеүек Балҡантауҙан сыға алмай йөрөймө әллә?



— Юҡ, улар бынан сығыу юлын белә, тик башҡа сәбәп менән килгәндәр, — тип һүҙгә ҡушылды Ербатыр.

— Фильм төшөрәм тип Урал батырға үҙең вәғәҙә иттең, Айбулат, һүҙеңдә тора алырһыңмы һуң? — Салауат туғанының яуабы менән берсә риза булмаған, берсә ғәжәпләнгән тон менән әйтеп һалды.

— Был теләк миндә Урал батырҙы мәктәптә уҡығанда, аҙаҡ яттан һөйләү конкурсында ҡатнашҡанда уҡ уянғайны. Ә бөгөн Урал батырҙың үҙен күргәс, хыялым йондоҙ булып күккә осҡандай булды!

— Ҡалай минең вариҫтарым үҙенең шиғри асылына бөгөн дә тоғро ҡалған! Афарин, егет, афарин! — Урал батырҙың йөҙөн ҡәнәғәт йылмайыу нурландырҙы. — Һеҙҙең рөхсәт менән, йәмәғәт, мин шишмәгә төшөп киләйем әле! Тәбиғәте һоҡланғыс бит илемдең, ҡай яғында ғына йөрөһәм дә, саҡ йотмай ҡалам телемде!

— Ербатыр, һин Бэтмендың килеүе сәбәбен беләһең, ахырыһы? — тип, башланған әңгәмәгә кире ҡайтты Хансура.

— Эйе, беләм. Улар Урал батырҙың көсөнә таң ҡала. Нисәнсе көн инде беҙҙең батырыбыҙ менән көрәшергә теләйҙәр, әммә майҙанға сығырға йөрәктәре етмәй. Улар Урал батырҙың мәңгелек көсөнөң серен аңлай алмай. Бәлки, һеҙ аңлатырһығыҙ?! — Ербатыр етди төҫ менән ҡараны малайҙарға.

— Дөрөҫөн әйткәндә, мине уларҙың хатта баҙнат итеүе аптырата, — тине Хансура.

— Көрәшеп ҡараһалар ҙа, Урал батыр еңәсәк бит инде! Ҡыҙыҡ булыр ине быны күҙәтеү! — тип күҙҙәрен балҡытты Салауат.

— Ә миңә хәҙер барыһы ла аңлашыла. Бөтәһе лә кешеләрҙең аҡы менән бәйләнгән. Кеше-Үрмәксене лә, Бэтменды ла, башҡа шундай геройҙарҙы ла кешеләр уйлап тапҡан. Баяғы компьютер һымаҡ инде. Ә Урал батыр — ул үҙе



Кешелекте һаҡлап алып ҡалған, Мәңгелек алышта Яҡшылыҡтың еңеүенә өлгәшкән герой. Ул бит ҡасандыр ошо Ерҙә йәшәгән, ул тере, ул Яҡтылыҡҡа хеҙмәт итеүсе, шуға ла уны берәү ҙә еңә алмай! — тине Айбулат.

— Минең ҡустым ҡалай аҡыллы! Фильмыңды ла шундай тәьҫирле итеп төшөрһәң, Оскар алырһың ул, әй! — Салауат еңел һулап көлөп ебәрҙе, ә үҙе Ербатырҙан һорап ҡуйҙы: — Әле Урал батыр беҙҙе ишетәме ул, нисек уйлайһың?

— Ишетәләр, моғайын! Ул бит быуаттар көсөн үҙенә туплаған, аҡылын йыйған, һиҙгерлеген алған шәхес! — тине Ербатыр.

— Ә анау телегеройҙарҙы көрәштереп ҡараһаҡ, ни булыр ине икән? — Салауатта һаман алыш сәме ҡайнай ине.

Әле бер, әле икенсе ҡаяға осоп йөрөүсе ике ҡунаҡты Ербатыр яндарына саҡырып алды. Улар ҡая башынан Урал батырға күҙ ташлап, уны күҙәтһә лә, яланда көткән малайҙар янына килмәй булдыра алманы.

— Ә һеҙҙең кемегеҙ көслөрәк икәнен беләһегеҙме? — тип һораны Ербатыр.

— Әлбиттә, мин! — тине Кеше-Үрмәксе.

— Нисек инде ул һин? Мин көслөрәк! — тине Бэтмен.

Улар үҙ-ара бәхәсләшеп китте. Ербатыр күпме генә тыйырға тырышып ҡараһа ла, улар торған һайын ҡыҙыпҡыҙып бәхәсләште, аҙаҡҡа табан кесерәйә барып, тауыштары ла кәмене.

— Ҡарағыҙ әле анау ике йән эйәһенә! — Хансура ҡысҡырып уҡ ебәрҙе.

Малайҙар үҙ күҙҙәренә үҙҙәре ышанмай торҙо: ҙур алышҡа тип килгән Бэтмен менән Кеше-Үрмәксе икеһе ике бөжәккә әйләнде лә ҡуйҙы.

— Улар бер-береһен еңергә теләп, донъяға ниндәй маҡсат менән килеүҙәрен дә онотто, бында ниндәй ниәт менән юл

тотоуҙарын бөтөнләй баштарынан сығарҙы. Бына ошо ҡылыҡтары уларҙы харап итте лә инде! — тине Ербатыр.

— Эйе, тарих дәресендә лә беҙгә уҡытыусыбыҙ изге яу менән яулап алыу һуғыштарының айырмаһы хаҡында йыш һөйләй. Кешеләр донъяла тик изгелек ҡылырға кәрәк икәнлеген белһә лә, ниңә яман күңеллеләр табыла икән? — тине Хансура.

— Көрәш булмаһа, спорт алға китә алмай, ти беҙгә тренер! Иң ҙур көрәш — үҙ-үҙең менән көрәш, тип тә өҫтәп ҡуя, — тип йөпләне Салауат.

— Күрәһең, донъя үҙе шулай ҡоролған — Урал батыр ата-әсәһен тыңлаһа ла, Шүлгән өлкәндәр һүҙенә ҡолаҡ һалмаған бит! Тимәк, Шүлгән юлын дауам итеүселәр ҙә



юк түгел был донъяла. Гөлнур өләсәйем әйтә бит, кеше тыуғанда уҡ йә Урал батыр вариҫы, йә Шүлгән вариҫы булып тыуа, тип, шулай булғас, ул телегеройҙарҙы йәл-ләргә генә ҡала, — тине Айбулат.

— Минеңсә, кешенең һайлау мөмкинлеге бар! Яҡшы-лыҡ ҡыл! Шул саҡ һин Урал батыр юлын дауам итеүсе булырһың! — тип үҙ фекере менән уртаҡлашты Салауат. — Шаулашмағыҙ, ана, Урал батыр килә! — Малайҙар тынып ҡалды.

— Баянан бирле ике серәкәйме, бөжәкме осоп тик йөрөй әргәмдә, әллә ни әйтмәкселәр, — тине Урал батыр малайҙар янына килеп етеп. Барыһы бергә йылмайышып, көлөп ебәрҙе.

— Хөрмәтле Урал батыр, бына минең әрмегә барғым килә, шул уҡ ваҡытта әсәйем, бөгөнгө заманда унан ситтә торорға кәрәк, ти. Ә атайым әрмелә саҡта әллә ниндәй ерҙәрҙе гиҙеп йөрөп ҡайтҡан! Минең дә күп илдәр күргем килә! — тине эсендәге иң ҙур теләген белдереп Хансура.

— Бына һиңә мә! Ғүмерҙә лә Хансура дуҫым әрмегә барырға теләй тип уйламаҫ инем! Һин бит һәр саҡ үҙеңде ҡурҡаҡ һымаҡ итеп тота торғайның? Ғәфү ит, дуҫым, әммә быны һорамай булдыра алманым, — тине Салауат.

— Юҡ, ҡурҡаҡ түгел мин, икеләнеүсәнмен. Берәй нәмә эшләр булһам, йөҙ мәртәбә уйлайым, икеләнеп хәлем бөтә. Ә бына Урал батырҙы күргәс, миңә әллә ниндәй сихри көс ингәндәй булды! — тип яуапланы Хансура.

*— Данлы батыр булығыҙ!*
*Олоно оло тиегеҙ,*
*Кәңәш алып йөрөгөҙ;*
*Кесене кесе тиегеҙ,*
*Кәңәш биреп йөрөгөҙ, —*



тине Урал батыр Хансураның башынан һыйпап. — Һинән шәп хәрби сығыуына һис шикләнмәйем!

— Эйе, ул, моғайын, хәрби табип буласаҡ, — тине Айбулат.

— Урал батыр, был малайҙарҙың һиңә тағы ла бер һорауы бар ине бит әле! — тине Ербатыр һүҙгә ҡушылып.

— Йәгеҙ, рәхим итегеҙ!

— Улар Балҡантауға сәйәхәткә килеп, бынан сығыу юлын таба алмай йөрөй. Нисек итеп тау ҡуйынынан кире үҙ донъяларына ҡайтырға мөмкин булыр икән?

— Бының сере ябай ғына, малайҙар! Шәжәрәгеҙҙе беләһегеҙме? — тип һораны Урал батыр.

— Шәжәрәбеҙҙе??? — Малайҙар барыһы бер юлы ҡабатланы. Хансура шундуҡ башын эйҙе.

— Мин ул дәрескә әҙерләнеп бармағайным, «икеле» алдым, етмәһә, аҙаҡ та теүәлләп ҡуйырға онотҡанмын, — тине ул.

— Һин хәтерләйһеңме, Айбулат туғаным, беҙҙең һыуытҡыстың тышында эленеп торған шәжәрәләге быуындар теҙмәһен? — тип һораны Салауат.

— Хәтерләгән дә, хәтерләмәгән дә кеүекмен... — Айбулат та ғәйепле рәүештә башын эйҙе.

— Мин шуны беләм: беҙҙең шәжәрә Урал батырҙан башлана, — тип ауыр тынлыҡты боҙорға тырышты Салауат.

— Малайҙар, улай бошоноп китмәгеҙ әле, сығырһығыҙ тауҙан! Ҡайтҡас, хатта яңынан килергә теләрһегеҙ әле, әммә был тау, биш йыл үтмәй тороп, һеҙҙе ҡабат индермәйәсәк. Моғайын, иҫегеҙгә төшөр шәжәрәгеҙ, — тип уларҙы йыуатырға тырышты Ербатыр.

— Эш унда түгел, оят булды. Урал батыр, ғәфү ит инде беҙҙе, ҡайтҡас, дуҫтарыбыҙҙы ла шәжәрәләрен яттан белергә өндәрбеҙ! Эйе бит, ағай! Хансура, һин дә килешәһеңдер бит?! — Был саҡырыу Айбулат ауыҙынан сыҡты.

— Әлбиттә! Әлбиттә! — тип ҡабатланы өлкәнерәктәре.

*— Ҡабул иттек вәғәҙәгеҙҙе!*
*Эйәрләгеҙ сәмегеҙҙе!*
*Ултырығыҙ сәмреғошҡа!*
*Осоп барайыҡ бер аҙ көнсығышҡа! —*

тине лә, Урал батыр малайҙарҙы ҡош янына әйҙәне.

— Ербатыр, һиңә ярҙамың өсөн рәхмәт инде! — Хансура яңы танышы менән ҡосаҡлашып хушлашты.

— Ә был значок беҙҙән иҫтәлек булып ҡалһын! Беҙ бөтәбеҙ ҙә ошо гимназияла уҡыйбыҙ! Бына, күрәһеңме, был түшкә ҡаҙай торған билдәлә беҙҙең уҡыу йорто төшөрөлгән! Кем белә, бәлки, күрешербеҙ әле! — тине Айбулат, Ербатырҙың түшенә значокты тағып.

— Һау булып тор, Ербатыр! Рәхмәт һиңә барыһы өсөн дә! Үпкәләштән булмаһын, беҙ бит егеттәр! — тигән һүҙҙәрҙән һуң Салауат уны ҡосаҡлап уҡ алды. Малайҙар бик йылы итеп хушлашты. Уларҙың күңелен бер аҙ моңһоу ҙа, бер аҙ тулҡынландырғыс та тойғолар биләп алды.

Оҙаҡ осто малайҙар ер өҫтөн байҡап. Бына ҡайҙан күренә икән ул Башҡортостандың матурлығы!

— Ҡоштар ошо бейеклектән күреп ғашиҡ булғандыр инде беҙҙең тыуған яҡтарға! — тигән булды Айбулат.

— Бер ҡасан да күктән ҡарағанда ер тағы ла йәмлерәк күренәлер тип уйламағайным! — тине Хансура.

— Был сәйәхәтте онотоплоҡ түгел! Урал батыр менән бергә сәмреғошта остом тиһәң, әллә кемдәр йығылып китәҙыр! — Салауаттың һүҙе булды был.

Ә Урал батыр мәртәбәле һыны менән әле ергә, әле күккә, әле малайҙарға ҡарап алды. Үҙ алдына ниндәйҙер доға уҡығандай итеп, әленән-әле битен һыпырып барҙы.



— Бына килеп тә еттек, егеттәр! Һеҙҙең алда ғаләмдең бар ишектәре лә асылыр, әгәр Яҡшылыҡ булһа атығыҙ! — тине Урал батыр.

Малайҙар сәмреғоштан төшөп тирә-яҡҡа баҡты. Урман шыҡһыҙ, аҡлан серле һымаҡ тойолдо уларға.

— Тел маһирлығы, зирәк зиһен теләп, ошо урында һеҙҙең менән хушлашам! Өләсәйегеҙ янына имен-аман ҡайтып етегеҙ! Уралтауҙан сәләм әйтегеҙ! — тине лә Урал батыр малайҙарҙың ҡулын ҡыҫып сыҡты. Сәмреғошҡа ултырып осҡан Урал батыр үҫмерҙәрҙең күҙ алдында болот араһына инеп юғалды.

Малайҙар бер килке ни эшләргә белмәй ултырҙы. Уларҙың тәьҫораттарынан да арына алмай, шул уҡ ваҡытта ҡайҙа барырға ла белмәй ҡул ҡаушырып өнһөҙ ултырыуҙарын ниндәйҙер шомло тауыш боҙҙо. Малайҙар бер-береһенә ҡарашып алды ла яйлап ҡына шул яҡҡа табан ыңғайланы.

— Моғайын, бында ингәндәге һымаҡ, тау ауыҙылыр ул! — тине Салауат.

Ысынлап та, улар елдәр иҫеп торған шаулы бер ҙур дөм-ҡараңғы тау ауыҙына барып сыҡты.

— Кәрәкле урынды ла таптыҡ, ҡайтып етергә бер генә аҙым ҡалды, — тигән булды Хансура.

— Шәжәрәне иҫкә төшөрһәк! — тип өҫтәне Айбулат.

— Ете быуындан да кәм булырға тейеш түгел бит. Шәжәрәмдең биш быуынын яҡынса беләм дә ул, әммә был ғына ярҙам итмәҫ шул. — Хансура, бөтә өмөтөм һеҙҙә тигән ҡиәфәт менән, бер туғандарға баҡты.

— Әйҙә, Айбулат, хәтерләйек!

— Әсәҙулла — беҙҙең олатай, уның атаһы Самат, уныҡы — Мырҙағәле, артабан — Ҡотлоәхмәт, шунан һуң Әбделмәлих... — Айбулат һыуытҡыстың ишеген күҙ алдына

килтереп, киләһе исемде иҫенә төшөрөргә тырышты, әммә килеп сыҡманы...

— Етәү булды түгелме һуң инде? — тип ҡысҡырып ебәрҙе Салауат.

— Юҡ шул, атай менән үҙебеҙҙе ҡушһаҡ ҡына етәү була! Шәжәрәлә үҙеңдән тыш етәүҙе белеү — шарт!

— Тап етенсе быуынды иҫкә төшөрөп булмай шул!

— Малайҙар, нисек иҫкә төшөрөрһөгөҙ икән, ә? — Хансура борсолоп китте.

— Салауат ағай, хәтерләйһеңме, әсәйем беҙгә уны ятлатҡайны? Әйҙә, шул көндө хәтерләп ҡарайыҡ, бәлки, шул рәүешле берәй нәмә уйға килер, — тине Айбулат.

— Ятламағайным шул! Ҡулыма яҙып алдым да, әсәйем күрмәгәндә генә шунан ҡараштырып һөйләнем, — тип ғәйебен таныны Салауат.

— Их һин!.. Гелән шулай итәһең, хатта биш быуынды ла иҫеңдә ҡалдырмағанһың! — тип ағаһын шелтәләне Айбулат.

— Ағайыңа өйрәтеп торма бында, үҙемә кәрәген үҙем белермен!

— Белгәс, әйт һуң, улайһа!

— Кем уйлаған инде донъялағы серле ишектәр тап шәжәрәһен белгәндәргә генә асыла, тип. Өләсәйем әйтмешләй, йығылырымды белһәм, һалам түшәп ҡуйыр инем. — Салауат был һүҙҙәрен берсә ярһып, берсә үкенес менән әйтте.

— Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ әле йығылманыҡ, малайҙар, бына шәжәрәбеҙҙе белмәү сәбәпле сыға алмай торһаҡ, был ысын мәғәнәһендә йығылыуға тиң буласаҡ! — тип төҙәтте Хансура.

— Ағай, һуң һин ятламаһаң да, ҡулыңа яҙғанһың бит! Ғалимдар әйтә, ҡулдан яҙған нәмә лә кешенең эске аңын-



да, хәтерендә ҡала, тип. Иҫеңә төшөрөп ҡара әле исемдәрҙе! — тигән булды Айбулат.

— Минең хәтеремдә булған исемдәрҙе әйтеп бөттөң шикелле!

— Шулай ҙа, әйтеп ҡара әле! Уйлап тормайынса һана!

— Салауат, Азамат, Ғабдулла, Самат, Мырҙағәле, Ҡотлоәхмәт, Әбделмәлих... Бына ошоларҙы ғына хәтерләйем!

— Туҡта, туҡта! Ағай, яңынан ҡабатла әле! Һин мин әйткән ҡайһылыр олатайҙың исемен әйтмәнең бит ул!!! — Айбулат ҡыуанып китте.

— Әйтмәгәс, тимәк, исемлек тағы ла кәмене түгелме ни?

— Юҡ, юҡ, улай түгел, һин әйткән исемлектә мин атамаған исем дә бар төҫлө булды! Яңынан ҡабатла әле!

— Яңынан икән, яңынан. Үҙемдән башлап ҡабатлайым: Салауат, Азамат, Ғабдулла, Самат, Мырҙағәле, Ҡотлоәхмәт, Әбделмәлих!

— Әйттем бит! Һин Ғабдулла олатайҙы ла иҫеңә төшөрҙөң! Ә мин әйткәндәр араһында ул юҡ ине: Әсәҙулла, Самат, Мырҙағәле, Ҡотлоәхмәт, Әбделмәлих... — Айбулаттың шатлығы эсенә һыйманы.

— Тимәк, тау ауыҙына барып, Салауат, Азамат, Ғабдулла, Әсәҙулла, Самат, Мырҙағәле, Ҡотлоәхмәт, Әбделмәлих тип әйтергә тейеш булам?! — тип һораны Салауат.

— Эйе, тап шулай!

Малайҙар ҡыуаныстарынан урман яңғыратып ҡысҡырып ебәрҙе. Шул саҡ ошо тиклем ҡыҙыҡлы, сихри тау иле менән хушлашҡылары ла килмәй төҫлө тойолдо уларға!

— Әллә тағы ла бер аҙ сәйәхәт ҡылабыҙмы? Мәҫәлән, тауҙың башҡа аҡландарын да күрергә теләр инем, — тине Салауат.

— Эйе шул! Ҡайтҡы килмәне лә ҡуйҙысы! — тине Хансура.

— Юҡ инде, ағайҙар, был сәфәрҙең аҙағы булырға тейеш! Һеҙ нисектер, минең бик ҡайтҡым килә! — тип ашыҡтырҙы уларҙы Айбулат. — Әйҙә, ағай, тауға рәхмәт әйтәйек тә, ҡабатла шәжәрәләге олатайҙар исемен!

— Донъя ҡалай ҡыҙыҡ икән ул, эйе бит, малайҙар! Мин ғүмеремдә лә, шәжәрәңде белеү асылмаҫ ишектәрҙе астыра, тип уйламаҫ инем. Бер ҡараһаң, шәжәрә, ете быуының — беҙҙең атай-олатайҙар исемлеге генә кеүек. Ә икенсе яҡтан ҡараһаң, күрәһең, уларҙың рухы, тәрән тамырҙарыбыҙ беҙҙе кеше булараҡ үҫтерә, көсөбөҙҙө арттыра! — тине ғорур рәүештә Хансура.

— Эйе, эйе, тап шулай! Һәр хәлдә, мин дә шулай уйлайым. Йә, ағай, ҡабатлайһыңмы, юҡмы?

Салауат тау ауыҙына килеп ҡысҡырып ебәрҙе:

— Салауат, Азамат, Ғабдулла, Әсәҙулла, Самат, Мырҙағәле, Ҡотлоәхмәт, Әбделмәлих!!!

Тау ауыҙы шауланы ла шауланы ел-дауыллап. Инде ҡапыл осоп китеп, тауҙың тыш яғында торорбоҙ тигән малайҙар урынынан да ҡуҙғалманы. Был ни хәл булды һуң, улар йәнә бер-береһенә ҡараштылар. Бер ни аңлашылманы!

— Һеҙ, моғайын, кемдеңдер исемен бутайһығыҙ! — тине Хансура.

— Нисек бутайбыҙ ти?! Юҡ, бутамайбыҙ! Барыһын да яҡшы хәтерләйем! Шәжәрәмде ятлап алдым! — тип аҡланды Айбулат.

— Ә ниңә улай булғас тау ишеген асмай? — Салауат ҡәнәғәтһеҙлек белдерҙе. Малайҙар араһында йәнә аңлайышһыҙ тынлыҡ урынлашты. Айбулат ҡабат-ҡабат иҫенә төшөрөп, үҙенең яңылышмауын аңланы. Тик эш нимәлә һуң?

— Бәлки, беҙ тауға матур итеп рәхмәт әйтә белмәгәнбеҙҙер? — тигән булды ул.



— Эш ундамы икән? Минеңсә, шәжәрә дөрөҫ әйтелмәй! — тип йәнә ҡабатланы Хансура.

— Һуң, нимәһе дөрөҫ түгел тағы? Ағайым бер исемде иҫенә төшөрҙө! Барыһын да тергеҙҙек! — Айбулат уйға ҡалды.

— Бәлки, эш ана шул бер исемдәлер? — Хансура һаман үҙенекен ныҡышты.

— Эйе, мин дә эш шәжәрәнең дөрөҫ әйтелмәүендәлер тип уйлайым. Сөнки дауыл ҡубып, ишектәр хәрәкәткә килә яҙҙы. Әммә асылманы ғына, — тине Салауат.

— Ағай, һин, Салауат, Азамат, Ғабдулла, Әсәҙулла, Самат, Мырҙағәле, Ҡотлоәхмәт, Әбделмәлих, тип ҡысҡырҙың, эйе бит?! Әйҙә, хәҙер Әсәҙулла олатайҙың исемен Ғабдулла олатайҙыҡынан алға ҡуйып әйтеп ҡара! — тине Айбулат. Шул саҡ ҡапыл урман шаулап ҡуйҙы. Малайҙар һиҫкәнеп китте. Улар йәнә ҡайтыр юлға әҙерләнде. Үҫмерҙәр тағы ла тауға ҡарап ҡыҙыҡлы сәйәхәт, иҫән-һау йөрөгәндәре өсөн рәхмәт әйтте.

Салауат тау ауыҙына килеп йәнә ҡысҡырып ебәрҙе:

— Салауат, Азамат, Әсәҙулла, Ғабдулла, Самат, Мырҙағәле, Ҡотлоәхмәт, Әбделмәлих!!!

Әйтерһең, ел-дауыл был юлы ҡоторҙо ғына! Малайҙар башта урман шаулауын тыңланы, йылғалар ярҙарынан ташып аҡты, ҡыуаҡтар тамырынан йолҡоноп, баш осталарында осоп йөрөнө. Ҡайҙалыр алыҫта, болоттар араһынан Урал батыр һыны тоҫмалланған кеүек булды уларға. Батыр үҫмерҙәргә, әйтерһең, ҡул болғай, хәйерле юл теләй ине. Ҡайҙалыр яҡында ғына Ербатыр ҙа уларға: «Һеҙ Ер уландары! Ер менән дуҫ булығыҙ!» — тип әйтә кеүек ине. Самабай ҙа яндарынан ғына елеп үтеп, һәр береһенең ҡулына ҡылған тотторғандай итте. Малайҙар ел-дауылға атланып, Балҡантау эсен тағы ла бер тапҡыр айҡапбайҡап сыҡты. «Башҡорт хәрефтәре баҡсаһы» әллә ҡай-

ҙан нурланып, хозур булып балҡып күренде. Бәрәкәт илендә кешеләр һаман баҡса ултырта, иген сәсә, аттар һуғара. Ниммәһе менәндер был ил уларға Башҡортостанды хәтерләткәндәй булды. Тик бында ҡалыу мөмкин түгел, һәр кем тыуған ерендә кәрәклеген һәм ҡәҙерле булырға тейешлеген аңланы бит үҫмерҙәр. Хәҙер улар бер башҡа үҫеп киткәндәй булды. Осоп йөрөй торғас, йоҡлап киткәндәрен дә һиҙмәне сәйәхәтселәр.

Уянғанда Балҡантау алдындағы имән төбөндә тәгәрәшеп яталар ине.

— Тороғоҙ, нишләп бында йоҡоға талдығыҙ әле һеҙ? — тип өндәшкән күрше Баязит ауылы көтөүсеһен ишетеп, улар күҙҙәрен асты. Былар барыһы ла төш булдымы, әллә өнмө, тип бер-береһенә ҡараштылар. Салауат, ҡулындағы ялтыр ҡылғанды күреп, һиҫкәнеп китте. Тимәк, был төш түгел, барыһы ла ысын булған. Хансура алғы кеҫәһенән сувенир рәүешендә эшләнгән «Ҫ» хәрефен килтереп сығарып, бер килке ғәжәпләнеп ултырҙы.

— Иң ҙур байлыҡ миндә! — тине Айбулат. — Ербатыр кеҫәмә нимә һала икән тиһәм, ул да булһа, бер ус тупраҡ икән. — Айбулат сигелгән ҡулъяулыҡҡа төрөлгән ҡара ерҙе сығарҙы.

— Замананың насар ҡотҡоһона бирелгән сираттағы үҫмерҙәр икән тиһәм, ҡалай аҡыллылар үҙҙәре! Эйе, иң ҙур байлыҡ — ер ул, — тине көтөүсе бабай.

Үҫмерҙәр көлөп ебәрҙе. Их, белмәй шул был бабай уларҙың ниндәй мажараға тарып, ниндәй һынауҙар аша үткәнен! Тиҙерәк ҡайтып, бөтә күргән-кисергәндәрен Гөлнур өләсәләренә һөйләп биргеләре килде.

66243- 49903

Городская ЦБ
г. Кумертау

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Мәктәптә ниңә ялҡытҡыс? . . . . . 3
Балҡантау сере . . . . . 9
Самабай тигән малай . . . . . 14
Бәрәкәт иле . . . . . 20
«Башҡорт хәрефтәре баҡсаһы» . . . . . 24
Донъялағы иң шәп компьютер . . . . . 42
Асылыкүлдең төбө . . . . . 57
Ваҡытофон . . . . . 65
Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,
йәки асҡыс шәжәрәлә ята икән! . . . . . 75

В соответствии с Федеральным законом
от 29 декабря 2010 г. № 436-ФЗ 6+

2010 йылдың 29 декабрендәге 436-ФЗ
һанлы Федераль законға ярашлы 6+

*Литературно-художественное издание*

Для детей младшего и среднего школьного возраста

**Абдуллина** Лариса Хашимовна

**ДУХ БАЛКАН-ТАУ**

Фантастико-приключенческая повесть

*(на башкирском языке)*

*Әҙәби-нәфис баҫма*

Кесе һәм урта йәштәге мәктәп балалары өсөн

**Абдуллина** Лариса Хашим ҡыҙы

**БАЛҠАНТАУ РУХЫ**

Мажаралы фантастик повесть

*(башҡорт телендә)*

Мөхәррире Р. М. Зәйтүнова
Биҙәлеш мөхәррире З. И. Кәримова
Техник мөхәррире Г. Р. Исхаҡова
Корректоры Г. Ә. Таһирова

Баҫырға ҡул ҡуйылды 05.11.2015. Форматы 70×90 $^{1}/_{16}$. Офсет ҡағыҙы. Офсет ысулы менән баҫылды. Мәктәп гарнитураһы. Шартлы баҫма таб. 6,72. Шартлы буяу отт. 27,79. Иҫәп-нәшер таб. 4,75. Тиражы 1500 дана. Заказ 151551.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

Әҙер файлдарҙан баҫылды.

Башҡортостан Республикаһының «Белая река» нәшриәте
дәүләт унитар предприятиеһы.
450078, Өфө, Киров урамы, 109.


КИТАП